ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 ноябрь (ҡырпағай) 2020

№47 (933)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Халыҡ аҡылына урау юл



8-9

"Губернатор" ауылына сәйәхәт



9

Йәнем теләгәнде яҙам



11

Коронавирустан түгел...

унын әҙемтәләренән вафат булалар




12

ТВ-программа 14

***Иғтибар: арзанға яҙылып ҡал!***
***Республикабыҙҙың һәр районы-ҡалаһында, иң төпкөл ауылдарҙа ла 3 декабрҙән 13-нә тиклем иғлан ителгән ун көнлөктә 2021 йылдың 1-се яртыһына ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 635 һум 82 тингә яҙыла алаһығыҙ.***
***Был мәғлүмәтте йәнәшәләге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине.***
***Мөхәрририәт.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бөгөн тормошобоҙҙа, йәшәгән төбәгегеҙҙә булып ятҡан ниндәй ҡыуаныслы ваҡиғалар, ыңғай күренештәр хаҡында һөйләргә теләр инегеҙ?

***Тәнзилә САФИУЛЛИНА, Баҡалы районы Баҡалы ауылы, йорт хужабикәһе:*** Ваҡытында балаларыма өс ейән-ейәнсәр ҡарап үҫтерештем: әсәләре уларҙы миңә ҡалдырып китәләр ҙә эшкә йүгерәләр, сөнки балалар баҡсаһы алыҫ, йыш ҡына унда урын да булмай ине. Ә бит уларҙы гел өйҙә генә ултыртып булмай, тышҡа сығарып уйнатырға, саф һауа һулап йөрөп килергә, бер һүҙ менән әйткәндә, мөмкин тиклем балалар баҡсаһындағыса тейешле режим буйынса тәрбиәләргә кәрәк. Ҡала тибындағы ҡатлы йортта йәшәгәс, бер үҙҙәрен генә лә сығарып ебәреп булмай. Ә ишек алдына сыҡһаң, ул саҡ ҡайҙа барырға ла белмәй аптырай инек, хатта ябай ғына бер эскәмйәне лә ватып киткән булалар. Ҡана лабаһа, ул саҡ ишек алдыбыҙҙа бәләкәй генә балалар майҙансығы булһа, тип бик күп ата-әсәләр, өләсәйҙәр хыяллана инек. Беҙҙең өсөн һуңлап булһа ла - һуң булһа ла уң булһын, тигәндәй, - бөгөн йорт ихатабыҙ танығыһыҙ булып үҙгәрҙе, матурланды, төҙөкләндерелде. "Башҡорт ихаталары" республика комплекслы программаһы буйынса бында балалар өсөн заманса уйын һәм спорт майҙансыҡтары төҙөлдө, был урындарҙа аяҡ аҫтына хәүефһеҙлек маҡсаттарында резина ҡатлам да түшәлгән хатта, сөнки бала-саға уйнаған, йүгергәндә йығылып та китеүе бар, ә былай ул йомшаҡҡа төшә. Йорт алдында элек арҡыс-торҡос туҡтап торған машиналар өсөн дә хәҙер тәғәйен туҡталҡа урыны бүленгән, эңерҙә ишек алдыбыҙ яҡтыртыла, сүп-сар урыны һәм кер элеп киптереү ҡулайламалары хаҡында ла онотмаған рәхмәт яуғыры төҙөүселәребеҙ. Шуныһы тағы бер рәхәт: хәҙер яуын, рашҡы мәлендә лә бысраҡ кисмәй генә йөрөп инәбеҙ: йорт алды юлдары тип-тигеҙ асфальт. Һәм ышанаһығыҙмы - йорт алдарына видеокамералар ҡуйылған! Бындай хәүефһеҙлек системаһы менән һәр бер Өфө йорто ла маҡтана алмайҙыр, моғайын. Хәтеремдә, бер йыллап элек ошо йортта йәшәүселәрҙе "Башҡорт ихаталары" программаһы менән таныштырып, беҙҙең фекер һәм теләктәрҙе яҙып алып йөрөнөләр, ләкин ул ваҡыт был пландың шулай еренә еткерелеп, ә иң мөһиме, халыҡ теләктәрен иҫәпкә алып башҡарылырына бер кем дә ышанмағайны, сөнки ул саҡ йорт ихаталары заманында законһыҙ рәүештә төҙөлгән һәм хәҙер иҫкереп, эс бошорғос күренеш тыуҙырған ниндәйҙер һарай, гараж, мөгәрәп кеүек шәхси ҡоролмалар менән тулған ине. Әле уларҙың береһе лә ҡалманы: һәр ерҙә таҙалыҡ, тәртип, ултырып ял ит, балаларыңды уйнат, спорт менән шөғөлләң - бының өсөн әллә ҡайҙа спорт залына барып йөрөргә лә кәрәкмәй, бөтә шарттар - үҙебеҙҙең йорт алдында. Әйткәндәй, "Башҡорт ихаталары" республика программаһы халыҡ йәшәйеше һәм ялы өсөн бик ваҡытлы һәм кәрәкле сара булып сыҡты. Телевидениенан да, гәзиттәрҙән дә ҡарап-уҡып белеүемсә, Башҡортостаныбыҙ районддары, хатта бәләкәй генә ауылдары ла, шулай уҡ, әлбиттә, баш ҡалабыҙ Өфө лә тап ошо проект буйынса йылдан-йыл үҙгәрә, төҙөкләнә барыуын күреп, күңел ҡыуана. Нисек кенә ауыр булмаһын, сир-сир тип зарланып ҡына ултырып булмай: кеше йәшәргә ынтылырға, балаларыбыҙҙы һау-сәләмәт итеп тәрбиәләргә тырышырға тейеш. Бының өсөн беҙгә шарттар тыуҙырыла икән, уны булдырыусыларға рәхмәтле булайыҡ та, ошо уңайлыҡтар менән файҙаланайыҡ. Тағы ла шуны әйткем килә: бик күп аҡса түгеп башҡарылған ошо уңайлыҡ-матурлыҡтарҙы күҙ ҡарабыҙҙай һаҡлайыҡ, ул бит беҙҙең уртаҡ милкебеҙ, юғиһә, ҡулдары ҡысытып торған вандалдар һәр ерҙә лә үҙ эшәкелеген ҡылырға ғына әҙер тора. Хәйер, ундайҙар беҙҙең йорт тирәһенә яҡынлай алмаҫ, тип уйлайым: әйтеүемсә, беҙҙә видеокамералар эшләй.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# БЫЛ ЕҢЕҮҘЕ...

## Борай уҡытыусыһы яуланы

**Ошо көндәрҙә Бөйөк Еңеүгә арналған "Еңеү дәрестәре" халыҡ-ара методик эшкәртмәләр конкурсына йомғаҡ яһалды. Ярышты Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы "Мәғариф" компаниялар төркөмө, Рәсәй тарих йәмғиәте һәм "Ватан тарихы" фонды менән берлектә ойошторҙо.**

Конкурста Рәсәйҙән һәм 25 сит илдән 15 мең педагог ҡатнашҡан. 2019 йылдың 1 сентябренән старт алған ярыштың тәүге һайлап алыу туры быйыл февраль айында ғына тамамланған, унда 11 йүнәлеш буйынса иң яҡшы эш өлгөләре билдәләнгән. Артабан ҡатнашыусылар үҙҙәре тәҡдим иткән методик эшкәртмәгә ярашлы дәресте Мәскәү ҡалаһында үткәрергә тейеш була, әммә билдәле сәбәптәр арҡаһында һуңға тиклем был ғәмәл кисектерелә килә. Һөҙөмтәлә, финалға сығыусылар дәрестәрен видеоға төшөрөп, жюри ҡарамағына тапшыра. Бына ошондай ябай булмаған һөнәри һынауҙа Башҡортостандан Борай ауылының 2-се гимназияһынан башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ләйсән Муллағәлиева "Туған тел" номинацияһында еңеү яулай.

**(Дауамы 2-се биттә).**



12+

ӘЙТӘГҮР!

**Мәғлүм булыуынса, 2007 йылда Салауат Юлаев проспектының беренсе сиратын төҙөү тамамланды һәм финанслау булмауы арҡаһында икенсе сиратын төҙөү кисектерелде. 2014 йылда уның икенсе сиратының беренсе участкаһын төҙөү проекты эшләнде һәм хәрәкәт өҙлөкһөҙ һәм туҡтауһыҙ булһын өсөн Интернационал урамын реконструкцияларға, унда биш юл сиселеше булдырырға кәрәк, тигән ҡарарға киленде. Әммә был бик ҙур сығымдар талап итеү сәбәпле, Ағиҙел йылғаһы аша төҙөләсәк яңы күпергә тура алып сыҡҡан альтернатив вариант эшләнә. Был осраҡта Салауат Юлаев проспекты өҙлөкһөҙ хәрәкәт магистрале статусын юғалтмаясаҡ. Һуңғы йылдарҙа баш ҡалала автотранспорт һаны артыуы юл хәрәкәтендә тығындар һәм башҡа проблемалар тыуҙырыуы барыбыҙға ла мәғлүм. "Өфө юлдарында йөрөү уңайлымы?" тигән һорауға йәмәғәт транспорты менән файҙаланыусылар, руль артында йөрөүселәр яуап бирә.**

# ӨФӨ ЮЛДАРЫНДА ЙӨРӨҮ УҢАЙЛЫМЫ?



***Гөлдәр ИШТУҒАНОВА, пассажир:*** Бөгөн водителдәрҙе иң ыҙалатҡаны - юлдарҙағы тығындар һәм ремонт эштәре. Әлбиттә, ремонт эштәренә аңлап ҡарарға кәрәк, юлдар төҙөкләндерелә. Быйыл был эштәрҙең бик күп урында алып барылыуы күҙгә ташлана. Тик ремонттарҙы төнөн түгел, ә көндөҙ, юлдарҙа хәрәкәттең ҡыҙыу булған ваҡытында атҡарыу ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Дөрөҫөн әйткәндә, был тәңгәлдәге етешһеҙлектәр ЮХХДИ хеҙмәтенә лә ҡағылалыр инде, улар, нисектер, йәйләргә тейеш түгелме икән ни хәрәкәтте? Баш ҡалала йәмәғәт транспортынан тыш, шәхси транспорт та бик күп, өҫтәүенә. Ҡағиҙә боҙоуҙар бихисап, юлдарҙа маршрут автобустары ныҡ ыҙалата, улар өсөн бөтөнләй тәртип тә юҡ - нисек теләйҙәр, шулай йөрөйҙәр. Әйтерһең, башҡалар өсөн яҙылған ҡағиҙәләр уларға ҡағылмай. Хатта "Тиҙ ярҙам" машиналарына ла юл бирмәйҙәр. Ысынлап та, йәмәғәт транспорты бигерәк ныҡ аптырата, улар пассажирҙар ташыймы, әллә йөк ташыймы - белмәҫһең. Ултырғыстар бысраҡ, кеше инер-инмәҫтән ҡуҙғалып та китәләр. Һин ултырып йәки тотоноп өлгөрәһеңме - уйҙарында ла юҡ. Уларға бер ниндәй ҡағиҙә булмағанлыҡтан, шулай ҡотороп киткән кеүектәр...

***Алексей НИЛОВ, Өфө маршруттарының берейһендә водитель:*** Әлбиттә, шәхси автомашинала йөрөүселәргә һәр юлда ла уңайлы, әммә маршрут автобустары водителдәренә улай түгел. Шәхси транспортында йөрөүселәр үҙенең ваҡыты, үҙ теләге, үҙ ихтыяры менән ҡайҙа теләй шунда хәрәкәт итә ала. Ә маршрут буйынса йөрөгән транспорттың үҙ маршруты, үҙ ваҡыты бар һәм ул юлда тығынмы, ремонт барамы, ҡармы-буранмы, билдәле ваҡытта билдәле туҡталышҡа йәки һуңғы туҡталышҡа барып етергә тейеш. Шәхси транспорт эйәләре икенсе юлдан да китә йәки ихаталар аша үтә ала, ә беҙ маршруттан ситкә тайпыла алмайбыҙ, беҙҙе туҡталыш һайын көтөп торалар.

Өфөлә юлдарҙы киңәйтеү менән бер рәттән, уң яҡтағы һыҙатты йәмәғәт транспортына бирергә ҡарар итеп, хатта унда махсус билдә һалып ҡуйғас, ҡыуанғайныҡ, әммә берәү ҙә уға иғтибар итмәй. Ул һыҙатты шул уҡ автоһәүәҫкәрҙәр биләй, хатта ҡайһы бер урамдарҙа унда көн дауамында машиналар ултыра, әйтерһең дә, был һыҙат автотуҡталҡа. Хәйер, кем өсөндөр ул шулай, күрәһең. Әле бына яңы закон ҡабул ителеп, транспорт йөрөгән юлда көн оҙоно ултырған автомобиль хужаларына штраф һала башлаһалар, бәлки, улар машиналарын юлдан алыр һәм беҙгә лә йөрөү бер аҙ уңайлы булып ҡалыр, ә әлегә юлдарҙы киңәйтһәләр ҙә, хәрәкәт иркенлеге күрмәйем.

***Айрат СӘЛӘХОВ, тәжрибәле водитель:*** Оҙаҡ йылдар машина йөрөтһәң, өйрәнеп китәһең һәм үҙеңә уңайлы маршрутты һайлайһың. Шуға ҡарамаҫтан, айырым уңайһыҙлыҡтар барыбер ҙә бар. Һәр хәлдә, яңы проспекттар, юл сиселештәре, альтернатив юлдар төҙөлөшө мәсьәләһе лә хәл ителергә тейеш, тип уйлайым. Сөнки Өфө ҡалаһы тау башында ултыра, шуға күрә уның ландшафты ла бер төрлө генә түгел һәм был үҙе үк юлдарҙың яҡшы булыуын талап итә. Салауат Юлаев проспекты төҙөлөүе ҡала урамдарын бер аҙ бушатҡан кеүек булғайны, әммә ваҡыт үтеү менән хәрәкәт тағы ла көсәйҙе. Сипайловоға барып етеп, Трамвай урамына, Октябрь проспектына сығыу өсөн уңайлы юл, боролош эҙләйһең, өҫтәүенә, бындағы юлдар ҡатламы ла бик яҡшынан түгел. Минеңсә, Салауат Юлаев проспектында төҙөлөш барышында ябылған барлыҡ юл сиселештәре асылырға тейеш. Шулай уҡ булғандарын да водителдәр өсөн уңайлы итеү тураһында уйларға кәрәк. Йәғни проспектҡа сыҡҡан һәр юл ҡағиҙәләргә ярашлы, водителдәр өсөн уңайлы, проспектҡа сыҡҡанда ваҡытты әрәм итмәй, юл саттарында оҙаҡ ваҡыт көтөп тормай, ҡаршы һыҙатты киҫеп үтмәй генә уңға боролорлоҡ булһын ине ул. Хәҙер альтернатив проспект тураһында ла һүҙ алып баралар, әммә, минеңсә, ул йә яр буйлатып, йә ҡаланан ситтә, яңы төҙөлгән биҫтәләр аша һалынырға тейеш.

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# КӨТӨП АЛҒАЙНЫҠ ТА УЛ...




**"Пятница" каналының "Орел һәм решка" тапшырыуы Башҡортостанда ҡунаҡта булды. Алдан уҡ был хаҡтағы рекламаларҙы ҡарап, тапшырыуҙың эфирға сыҡҡанын ашҡынып көткәйнек. Алып барыусылар Регина Тодоренко менән Тимур Родригездың Рәсәй буйынса сәйәхәт тапшырыуҙарын бығаса ла күҙәтеп барғас, беҙҙең республиканы нисек күрһәтерҙәре, әлбиттә, бик ҡыҙыҡ булыр һымаҡ ине.**

Әммә... Тапшырыуҙы саҡ ҡарап бөттөм... Кәйеф төштө. Республикабыҙ тураһында бик ярлы, өҫтән-мөҫтән генә күрһәтелгән тапшырыу булды был. Мәскәү ҡунаҡтарын Өфө эргәһендә генә йөрөттөләр, шуға ла башҡорт донъяһы бик ярлы һәм дөрөҫ булмаған юҫыҡта сағылдырылды кеүек тойолдо.

Нимәнән башлайым? Милли кейем һәм биҙәүестәрҙән. Улар хаҡында күпме һөйләнә, яҙыла, күргәҙмәләр ойоштороло - кем өсөн һуң? Бөтөн донъяға сыға торған тапшырыу һынлы тапшырыуға ысын милли биҙәүестәр, төп нөсхәһендәге башҡорт милли күлдәктәре табып булманымы икән ни? Ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ баҙарынан килгән сит орнаментлы, алюмин шаҡы-шоҡо таҡҡан ҡатын-ҡыҙҙы күреп, йөҙҙө ҡаплар хәлгә еттеләр...

Ҡот ҡойоу һәм мейе төшөрөү алымдары аша башҡорттоң далалау йолаһын төшөргәндәр. Әммә бында ла әҙәм аңларлыҡ, дөрөҫлөккә тап килгән күренеш килеп сыҡманы. Бында, әлбиттә, йолала ҡатнашҡан өс әбейҙең гәйебе юҡ, тапшырыуҙы ойоштороусылар уңышлыраҡ вариантты һайларға, уны дөрөҫ итеп тәҡдим итергә тейештәр ине.

Милли эсемлегебеҙ буҙаны ла Дудкино ауылынан ниндәйҙер Николай яһай булып сыҡты. Башҡортостанда Николайҙан башҡа буҙа оҫтаһы юҡ, тимәк... Милли эсемлектәр, аҙыҡ-түлек бәйгеләрендә еңгән оҫта ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ бихисап та баһа, ни өсөн шуларҙың береһен тәҡдим итмәнеләр - аңлашылмай. Башҡорт кухняһы тулыраҡ, йөкмәткелерәк сағылдырылыр ине, юғиһә.

Ҡунаҡтарҙың береһе - Регина ҡиммәтле ҡунаҡханала йәшәне, шәп ресторанда һыйланды, тик бында ла һорау тыуа: Башҡортостанды һүрәтләгәс-һүрәтләгәс, ниңә ҡунаҡтарға башҡорт атамалы ресторан һәм ҡунаҡхана тәҡдим ителмәгән? Ресторанда ҡунаҡҡа йылҡы итенән бешерелгән борщ ашаттылар, сало бирҙеләр, креветканан яһалған манты менән һыйланылар һәм шундай манты һәр ғаиләлә бешерелә, тинеләр...

Ә Тимур Родригездың Өфөлә бары тик Зәйнетдин менән генә күрешеүе лә аптыратты. Башҡорт сәнғәтен ошо кимәл менән генә күрһәттеләр булдымы был? Рәп урынына ҡурай моңо, оҙон көй башҡарылырға тейеш ине бит...

Ағас эше оҫталары янында ла булды Тимур. Оҫталар башҡорт ҡамсыһын нагайка тип атаны. Ысынында, оҙоно - сыбыртҡы, ҡыҫҡаһы ҡамсы тип атала башҡортса. Нагайка беҙҙең һүҙ түгел, Нуғай урҙаһындағы ҡулындағы ҡамсыны (төрки халыҡтарындағы) урыҫтар шулай атаған. Беҙҙә бәләкәй сыбыртҡы борон-борондан ҡамсы тип яҙыла. Тарихи әҫәрҙәрҙә алып ҡарағыҙ, бер ерҙә лә нагайка юҡ, ҡамсы бар.

Әлбиттә, "Орел һәм решка"ла матур күренештәр ҙә булманы түгел, әммә тапшырыуға төшөүселәрҙең белгестәр тарафынан әҙерләнеп, һайлап алынмауы күҙгә ташланды һәм яҙманың бөтөн йәмен боҙҙо. Алып барыусыларҙың буш стадионда йөрөүе, мөһим булмаған темаларҙы яҡтыртыуы, республика тормошон, халыҡ һулышын сағылдырыр уңышлы кадрҙарҙың иғтибарҙан ситтә ҡалыуы, шулай уҡ балдың литрын ун меңгә һатыуҙары ла сәйерһендерҙе. Дөйөм алғанда, тапшырыу Башҡортостан тигән данлы исемгә тап килмәне.

**Әлиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Стәрлетамаҡта бишенсе саҡырылыш ҡала округы Советының IV ултырышында депутаттар ҡала мэры вазифаһына өс кандидат - Дамир Әбдрәхимов, Владимир Куликов, Александр Потапов араһынан Владимир Куликовтың кандидатураһын бер тауыштан хупланы.

✓Башҡортостанда "Башҡорт шағирҙарының шиғырҙарын туған телдә" яттан һөйләүселәрҙең республика онлайн-конкурсы башлана. Ҡатнашыу өсөн башҡорт шағирының бер шиғырын туған телдә яттан һөйләп, видеороликты "Шиғыр һөйләүселәр конкурсы" билдәһе менән FOTOIKS@yandex.ru электрон почтаһына ебәрергә кәрәк. Конкурс 6 декабргә хәтлем биш йәш категорияһында ойоштороло. Конкурсҡа йомғаҡ 14 декабрҙә, Башҡорт теле көнөндә яһала. Положение менән Халыҡтар дуҫлығы йортоноң сайтында танышырға мөмкин.

✓Төбәк брендтарының "Рәсәй тамдәре" беренсе милли конкурсына Башҡортостандан 26 ғариза ебәрелде, тип хәбәр иттеләр республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан. Конкурста үҙенең бауырһағы менән Федоровка районы, шулай уҡ Бөрйән солоҡ балы, башҡорт крем-балы, ҡорот, ҡаҙы, талҡан, ҡаҡланған дөйәғош ите, Ҡариҙел үләндәре, сырҙар, минераль һыуҙар ҡатнаша. Халыҡ 2 декабргә тиклем тауыш бирә ала.

✓Стәрлетамаҡта клиник-диагностик үҙәкте төҙөү дауам итә һәм уны 1 декабргә файҙаланыуға тапшырыу, 5 декабргә тәүге пациенттар ҡабул итеү планлаштырыла. Ике сменала алып барылған эштәргә көнөнә 700-ләп эшсе һәм 80-дән ашыу техника йәлеп ителә. Әле бында йылытыу, вентиляция, электр тәьминәте системаһын монтажлайҙар. Бер үк ваҡытта эске биҙәү-һылау эштәренә, территорияны төҙөкләндереүгә лә тотондолар.

✓Көҙгөһөн Апимондия етәкселеге башланғысы менән 80-гә яҡын илдең умартасылыҡ ассоциациялары вәкилдәре ингән халыҡ-ара федерация ағзаларының фекере тыңланды. Умартасыларҙың күпселеге конгресты уҙғарыу ваҡытын күсерергә кәрәклеген әйтте. 7 ноябрҙә Апимондияның башҡарма комитеты ултырышында Өфөлә 47-се конгресты һәм "АпиЭкспо" күргәҙмәһен 2022 йылдың көҙөндә үткәреү тураһында ҡәтғи ҡарар ҡабул ителде.

✓ *"Беҙ ауылды һаҡларға тырышабыҙ. Ҡайҙа ғына фельдшер-акушерлыҡ пункттары асыуҙа ҡатнашһам да, был - халыҡ өсөн оло шатлыҡ. Ошо эште дауам итергә кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы.*



ҠЫҪҠАСА

# ШӘХЕСТӘР ӨЛГӨҺӨ

**Салауат районы Малаяҙ ауылында, Дыуан күп профилле колледжы биләмәһендә, полиция генерал-лейтенанты Артур Әхмәтхановтың бюсы ҡуйылды.** "Был ваҡиға беҙҙең өсөн бик мөһим. Салауат районында тыуып үҫкән ябай ауыл малайы күп нәмәгә өлгәшкән һәм генерал-лейтенант дәрәжәһенә еткән, эске эштәр министры булған, бөтә ғүмерен халыҡтың һәм дәүләттең мәнфәғәттәрен яҡлауға биргән. Йәштәребеҙ бөгөнгө көндә беҙгә ныҡ кәрәк булған сағыу һәм ҡыҙыҡлы шәхестәр өлгөһөндә үҫһен өсөн ошондай һәйкәлдәр ҡуйырға кәрәк, тип уйлайым", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бюсты асыу тантанаһында.

✓ **Башҡортостанға 2024 йылға тиклем беренсел медицина звеноһын үҫтереү өсөн федераль бюджеттан 15 миллиард һум бүленә.** Был турала хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе. "Шулай итеп, 2024 йылға яңыртылған һаулыҡ һаҡлау системаһы менән сығыу өсөн бөтә мөмкинлектәребеҙ бар. Айырыуса был ауыл биләмәләренә ҡағыла. Беҙ ауылды һаҡларға тырышабыҙ. Ҡайҙа ғына фельдшер-акушерлыҡ пункттары асыуҙа ҡатнашһам да, был - халыҡ өсөн оло шатлыҡ. Ошо эште дауам итергә - яңы сифатлы фельдшер пункттары төҙөргә һәм улар өсөн кадрҙар табырға кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы һәм киләһе оператив кәңәшмәгә 2021 йылға аҡса бүлеү планы хаҡында мәғлүмәт әҙерләргә ҡушты.

✓ **2021 йылдың 1 ғинуарынан балалар баҡсаһы өсөн ата-әсә түләүе айына уртаса 1749,16 һумға тиклем арта.** Республика Мәғариф министрлығының тейешле бойороғо 12 ноябрҙә Башҡортостан Республикаһының рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. "Башҡортостан биләмәһендә урынлашҡан дәүләт һәм муниципаль белем биреү ойошмаларында балаларҙы ҡараған өсөн ата-әсә түләүен айына уртаса 1749,16 һум күләмендә билдәләргә",- тиелә документта. 2020 йылдың ғинуарынан республиканың мәктәпкәсә учреждениеларында балаларҙы тәрбиәләгән өсөн ата-әсә түләүенең уртаса күләме 1677 ҡиммәлендә билдәләнде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ата-әсәләрҙең балалар баҡсаһы өсөн түләүгә компенсация алырға хоҡуғы бар. Әйтәйек, баҡсаға бер генә бала йөрөй икән, компенсация күләме түләнгән сумманан 20 процент була. Ике бала йөрөһә, 50 процент; өс һәм унан күберәк балалар - 70 процент.

✓ **Росстат мәғлүмәттәренә ярашлы, сентябрҙә Башҡортостанда 3 850 сабый тыуған, был уҙған йылдың ошо уҡ осорона ҡарағанда 539 балаға күберәк.** Был күрһәткес буйынса республика илдә - дүртенсе, Волга буйы төбәктәре араһында - алдынғы урында. Ләкин быйыл туғыҙ айҙа, ғинуарҙан сентябргә тиклем, республикала 2019 йылдың шул уҡ осоро менән сағыштырғанда тыуымдың 2,3 процентҡа кәмеүе теркәлгән. Быйыл әлеге осорҙа 30 934 сабый донъяға килгән, былтырғыға ҡарағанда 720-гә аҙыраҡ (31 654). Сабыйҙарҙың үлем осраҡтары аҙайған. Йыл башынан сентябргә хәтлем бер йәшкәсә 172 бала вафат булған (2019 йылдың ошо уҡ осоронда - 211).

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠАҘАҠТАР МЕНӘН...

**Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Нур-Солтанда йәнә Башҡортостан вәкиллеге асыла. Уны ойоштороу буйынса эш тураһында Ҡаҙағстандың рәсми делегацияһы менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте.**

Астана ҡалаһындағы вәкиллек 2016 йылдың 1 апрелендә ябылғайны. Былтыр илдең дәүләт секретары Ҡырымбәк Кушербаев Башҡортостандың Ҡаҙағстандағы вәкиллеге эшен тергеҙергә тәҡдим итте. Шуны билдәләп үтәйек: 2020 йылдың мартында Өфөлә Ҡаҙағстан Республикаһының почётлы консулы Булат Әсәҙуллин эшләй башланы. "Нур-Солтанда Башҡортостан вәкиллеген асыу буйынса барлыҡ формаль процедуралар тамамланғас, коронавирусҡа бәйле хәлде лә иҫәпкә алып, Ҡаҙағстанға рәсми сәфәр менән барырға йыйынабыҙ", - тине осрашыуҙа Радий Хәбиров. Яҡтар сәнәғәттә, иҡтисадта, мәғарифта һәм мәҙәниәттә хеҙмәттәшлекте нығытыу мөмкинлектәрен тикшерҙе. Билдәләнеүенсә, Башҡортостан биләмәһендә Ҡаҙағстандан капитал ҡатнашлығында ойошторолған 37 предприятие эшләй. Ҡаҙағстан компанияларының береһе Ишембай районындағы "Алға" махсус иҡтисади зонаһында 1,4 миллиард һумлыҡ инвестиция менән полипропилен еп һәм полиэтилен сетка етештерә башларға ниәтләй. Радий Хәбиров Ҡаҙағстандың бизнес-даирәләренә быйыл декабрҙә Халыҡ-ара бизнес аҙналығы эшендә ҡатнашырға тәҡдим итте, шулай уҡ 2021 йылда Фольклориадаға саҡырҙы.

**Белешмә.** 2019 йыл йомғаҡтары буйынса Ҡаҙағстан 7,9 процент өлөш менән Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнешендә дүртенсе урынды биләй, Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәре араһында 34,2 процент сағыштырма ауырлыҡ менән икенсе урында тора. Үҙ-ара тауар әйләнеше 361,6 миллион доллар тәшкил итә.

# ИҠТИСАДҠА ЯРҘАМ

**Башҡортостан Башлығы үҙенең эш сәфәре сиктәрендә Баймаҡ районының крәҫтиән фермер хужалыҡтары эшҡыуарҙары һәм етәкселәре менән осрашты һәм аграрийҙар, эшҡыуарҙар менән иҡтисадҡа ярҙам системаһын камиллаштырыу мәсьәләләрен тикшерҙе.**

Хужалыҡ етәкселәре үҙ сығыштарында ауылдарҙағы бәләкәй бизнес үҫешенең иң көнүҙәк мәсьәләләренә иғтибар йүнәлтте. Был фермерҙарға һәм кооператив хәрәкәткә грант ярҙамын үҫтереү, агротуризм өлкәһендәге проекттарҙы субсидиялау, республика сауҙа селтәрҙәрендә һәм Өфө, Стәрлетамаҡ кеүек ҡалаларҙың эре баҙарҙары аша продукцияны һатыуҙа булышлыҡ итеү мәсьәләләренә ҡағылды. "Бай" ауыл хужалығы кооперативы эшҡыуары Рөстәм Әхмәтов һөт эшкәртеү менән шөғөлләнә. Быйыл кооператив хужалыҡтары 265 тонна һөт етештергән. Шуның бер өлөшөн улар уҙаллы эшкәртеп, ҡорот етештерә. Радий Хәбиров һөткә эске ихтыяжды арттырып, районда "Һөт кухняһы" сиктәрендә балалар өсөн аҙыҡ-түлек пункты асырға тәҡдим итте.

Тағы бер көнүҙәк мәсьәлә - сеймал менән ҙур булмаған урман эшкәртеү предприятиеларын тәьмин итеү ҡаралды. Башҡортостан Башлығы Хөкүмәткә урындағы эшҡыуарҙарға эш өсөн бер аҙна эсендә участкалар бүлеүҙе ҡарарға ҡушты. Бизнесмен Радмир Ғирфанов 2011 йылдан бирле төҙөлөш өлкәһендә эшләй. Уның проекттары иҫәбендә - Баймаҡта коворкинг-үҙәк төҙөлөшөндә ҡатнашыу. Эшҡыуар базала "Минең бизнес" ярҙам институты филиалының үҙеген асыуҙа булышлыҡ итеүҙе һораны. Республика Башлыҡы был башланғысты хупланы һәм Башҡортостан Хөкүмәтенә филиалды асыу буйынса ойоштороу эштәрен хәл итергә ҡушты.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар шулай уҡ юл төҙөлөшө, кәрәҙле элемтә һәм интернет ҡабул итеү зонаһын киңәйтеү, төрлө тармаҡ предприятиелары араһында үҙ-ара аңлашыуҙы көйләү, бәләкәй бизнесҡа заманса финанс сараларына юл асыу мәсьәләләренә туҡталды.

# ТАБИПТАР ЕТЕШМӘЙ

**БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының өсөнсө квартал йомғаҡтары буйынса яһалған отчетынан күренеүенсә, былтырғы менән сағыштырғанда Башҡортостанда табиптар һаны 197 кешегә, йәғни 1,4 процентҡа кәмегән. Табиптарҙың оптималь һанына өлгәшелмәгән.**

2020 йылда 10 мең пациентҡа 37 табип тура килергә тейеш булһа, статистика күрһәтеүенсә, был һан - 35,8. Медиктарҙың һаны кәмеүе кадрҙарҙың күпләп китеүе һәм оло йәштәгеләрҙең пенсияға сығыуына бәйле. Быйыл ғына 20 процент тәжрибәле доктор хаҡлы ялға киткән. Эш хаҡы түбән булыуы, ауыр һәм хәүефле хеҙмәт шарттары, юғары хеҙмәт интенсивлығы, юғары стресс кимәле, торлаҡ шарттары алыу ҡатмарлыҡтары сәбәпле эштән китеүселәр ҙә бар. Шулай уҡ амбулатория шарттарында медицина ярҙамы күрһәтеүсе табиптар һаны ла кәмегән. 2019 йыл менән сағыштырғанда улар 180 кешегә (2,1 процент) кәмерәк. 10 мең кешегә 21,1 күрһәткесе лә 20,8-гә төшкән.

Башстат мәғлүмәттәре буйынса, ғинуар-июндә 14,3 мең табип иҫәпләнгән. Уларҙың уртаса эш хаҡы - 71 мең һум. Урта медицина персоналы һаны - 37,4 мең, кесе медперсонал - 2 мең. Терапевтарҙың эше артыуы һөҙөмтәһендә медицина учреждениеларына Башҡорт дәүләт медицина университетының студент-ординаторҙары һәм юғары курс студенттары йәлеп ителә. Өфө поликлиникаларында ошо көндәрҙә 150 ординатор участка терапевтары вазифаһында эшләй башланы. Республика буйынса барлығы 1200 ординатор дауаханаларҙа һәм поликлиникаларҙа төрлө вазифаларҙа эшләй. Тағы ла 200 буласаҡ медик резервта тора һәм медицина учреждениелары һорауы буйынса эш башлаясаҡ.

# ЭШ УРЫНЫНДА...

**Йыл һайын Башҡортостан иҡтисады эш урынындағы фажиғә йә һаулығына килтерелгән ауыр зыян арҡаһында эшкә һәләтле йәштәге 200-ҙән ашыу кешене юғалта. Был хаҡта Өфөлә булып үткән онлайн фәнни-ғәмәли конференцияла Дәүләт хеҙмәт инспекцияһы етәксеһе Татьяна Астрелина хәбәр итте.**

40 проценттан ашыу осраҡта һүҙ "тәбиғи" тип аталған, йәғни ауырыу арҡаһындағы үлемдәр хаҡында бара. Иң күп процент тәшкил иткән ҡапыл үлемдәр күберәк эшкәртеү производствоһында, транспортировкала, төҙөлөш һәм сауҙала күҙәтелә. Ирҙәрҙең эш урындарында ҡатын-ҡыҙға ҡарағанда 12 тапҡырға йышыраҡ үлеүе теркәлгән. 2014-2018 йылдарҙа 248 ир һәм 20 ҡатын-ҡыҙ һәләк булған. 56-60 йәш араһында ҡапыл үлемдәр айырыуса йыш була. Эш урынында ҡапыл үлемдәрҙең 90 процент осрағында ҡан әйләнеше сирҙәре төп сәбәп булып тора. Күпселек осраҡта был ишемик йөрәк сирҙәренең киҫкен һәм хроник формалары. Шул уҡ ваҡытта үлеүселәрҙең 81 проценты эшкә ҡабул ителгәндә медосмотр үтмәгән, был иһә уларҙың сирен ваҡытында асыҡларға мөмкинлек бирмәгән. Өфө Хеҙмәт медицинаһы һәм кеше экологияһы ғилми-тикшеренеү институты тикшеренеүҙәре нигеҙендә эш урынында дөйөм ауырыуҙарҙан үлем хәүефен кәметеү буйынса тотош саралар комплексы булған программа эшләнә. Медосмотрҙар сифатын яҡшыртыу менән бер рәттән, предприятиеларҙа тейешле медицина аппаратуралары булған фельдшерлыҡ һаулыҡ пункттарын тергеҙеү мәсьәләһе ҡарала.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң "Кашҡаҙан" паркына 20 метрлыҡ шыршы ҡуйылды. Ул Нуриман районынан килтерелгән. "Урман ҡупшыҡайын Өфөгә махсус техника һәм кран ярҙамында алып килдек", - тип һөйләне "Сипайлово" муниципаль бюджет учреждениеһы начальнигы урынбаҫары Ильмир Шәймәрҙәнов. Тиҙҙән бында тауҙар, лабиринттар һәм боҙ һындары менән әкиәти ҡаласыҡ та барлыҡҡа килә, тип хәбәр ителә ҡала мэрияһы сайтында.

✓Өфө-Аэропорт трассаһында тиҙлекте сикләү билдәләре алмаштырылды. Был хаҡта баш ҡала хакимиәтенән хәбәр иттеләр. Шулай итеп, автомобиль юлында тиҙлек режимы сәғәтенә 80 саҡрымдан 60-ҡа тиклем кәметелде. Шуға ярашлы, барлыҡ юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен фото- һәм видеотеркәү камералары яңыһына көйләнде.

✓Өфө Яңы 2021 йылды байрам итеүгә әүҙем әҙерләнә. Мэрия мәғлүмәттәре буйынса, ҡалала өс баш ҡала, 16 район шыршыһы һәм күп фатирлы йорттарҙың ихаталарында, сауҙа предприятиелары биләмәләрендә 90-ға яҡын шыршы ҡуйыу күҙаллана. Өфөнөң төп шыршылары Ленин исемендәге майҙанды, Салауат Юлаев майҙанын һәм Совет майҙанын биҙәй.

✓Өфөлә "Бурыслы" иҫкәртеү операцияһы башланды, уның төп маҡсаты - штраф түләмәүселәрҙе асыҡлау һәм яуаплылыҡҡа тарттырыу. Был хаҡта баш ҡаланың Дәүләт автоинспекцияһынан хәбәр иттеләр. Штрафты ҡарар көсөнә ингәндән һуң 60 көн эсендә түләргә кәрәк. Юғиһә, уның күләме икеләтә арта. Быйыл ҡануниәт бурыслы водителдәрҙе 15 тәүлеккә ултыртыу мөмкинлеген дә күҙ уңында тота. Штрафты ҡарар сығарылған көндән башлап 20 көн эсендә түләгән осраҡта, 50 процент ташлама бирелә.

✓Өфөлә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының билдәле актёры Зәһир Вәлитовҡа тантанаһы рәүештә мемориаль таҡтаташ асылды. Таҡтаташ Ғафури урамында Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты йәшәгән 48-се йортҡа ҡуйылды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Артур Ғафаров белдереүенсә, хәрби хеҙмәттән ҡасып ҡалған өсөн етди яза саралары ҡаралған - штраф түләүҙән алып эшкә мәжбүри йәлеп итеү, ҡулға алыу һәм енәйәт яуаплылығына тарттырыу.***



*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*

# СӘЛӘМӘТЛЕК ЙӘШТӘН КӘРӘК

**Был аҙнала республикала Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге эш башланы. Хәҙер Башҡортостан халҡы көнүҙәк мәсьәләләр, шул иҫәптән коронавирустан дауаланыу һәм бушлай дарыуҙар алыу буйынса кәрәкле консультатив ярҙамды тиҙ арала аласаҡ. Үҙәк белгестәре шулай уҡ эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙҙарын алыу йәки медицина күрһәткестәре буйынса госпитализация буйынса ярҙам күрһәтергә әҙер.**



Өфө ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһе лә ошо яңылыҡтан һәм коронавирус хәүефенең таралыуына юл ҡуймау, уны иҫкәртеү, сирлеләргә ярҙам итеү буйынса әлеге ваҡытта актуаль булып торған мәсьәләнән башланды. Хәйер, был теманың инде ярты йылдан ашыу эҙмә-эҙлекле тәүге урынға сығыуы сер түгел. Тәүге урында - һаулыҡ, ҡалған эштәр һуңынан. Һаулыҡ тигәндән, кәңәшмәнең төп темаларының береһе итеп белем биреү учреждениеларын медицина кабинеттары менән тәьмин итеү мәсьәләһе сығарылды. Был хаҡтағы мәғлүмәтте ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова еткерҙе.

Балаларҙың һаулығын хәстәрләп, белем биреү ойошмалары балалар поликлиникалары менән берлектәге эшмәкәрлек тураһында килешеү төҙөй һәм уларға бушлай бүлмә бирә. Унда табип-педиатр һәм процедура кабинеты булдырыла, медицина хеҙмәтен белгестәр башҡара. Бөгөн мәктәптәрҙә 160 медицина хеҙмәткәре хеҙмәтләндерә, улар поликлиникалар раҫлаған шәхси графикка ярашлы эшләй. Мәктәптәрҙең медицина кабинеттары базаһында тар тармаҡ белгестәрен саҡырып, профилактик тикшереүҙәр үткәрелә, тиҙ һәм беренсе ярҙам күрһәтелә, вакцинация үткәрелә, карантин режимында эпидемияға ҡаршы ашығыс саралар тормошҡа ашырыла. Әле мәктәптәрҙә 41524 балаға киҙеүгә ҡаршы вакцинация эшләнгән. Бынан тыш, 58 белем биреү учреждениеһында (мәктәптәрҙең дөйөм һанынан 45 процент) стоматология кабинеттары йыһазландырылған. Унда ла белгестәр килешеү буйынса эшләй, уҡыу йылы дауамында 73 меңдән ашыу баланың ауыҙ ҡыуышлығын тикшереү планлаштырыла. Ата-әсәләр белдереүенсә, мәктәптәрҙә медицина һәм стоматология кабинеттеры булыу уларҙы бер мәшәҡәттән бушата, даими рәүештә балаларҙы поликлиникаға алып барыу өсөн эштән һорап китеү мәсьәләһе лә борсомай.

Көн тәртибенә сығарылған икенсе мәсьәлә лә ниндәйҙер кимәлдә сәләмәтлеккә бәйле - көҙгө хәрби хеҙмәткә саҡырыу бара. Башҡортостан егеттәре һәр саҡ үҙҙәренең ныҡлы сәләмәтлеге һәм хәрби хеҙмәтте намыҫлы үтәүе менән билдәле. Коронавирус эпидемияһы осоронда хәрби хеҙмәткә саҡырыу эше лә барлыҡ талаптарҙы һәм ҡағиҙәләрҙе үтәп башҡарыла. Был хаҡта ҡала хакимиәтенең Граждандар йәмғиәте институты менән бәйләнеш буйынса идаралыҡ начальнигы Артур Ғафаров таныштырҙы. 16 ноябргә ҡарата Өфө буйынса саҡырылырға тейешле контингенттың 54 проценты, йәғни 3410 кеше призыв комиссияларына саҡырылған. Көҙгө саҡырылышҡа 777 кешене хәрби хеҙмәткә оҙатырға наряд бирелһә, әле 513 кеше хәрби комиссия үткән һәм хәрби хеҙмәткә тәғәйенләнгән. Барлығы 5579 кешегә хәбәр ителһә, 600 кешене эҙләү ойошторолған. Артур Ғафаров белдереүенсә, хәрби хеҙмәттән ҡасып ҡалған өсөн етди яза саралары ҡаралған - штраф түләүҙән алып эшкә мәжбүри йәлеп итеү, ҡулға алыу һәм енәйәт яуаплылығына тарттырыу. Шуға күрә, биографиянды бысратҡанға ҡарағанда, һау-сәләмәт булып, бер йыл хәрби бурысыңды үтәп ҡайтыу яҡшыраҡ түгелме ни?

Ә һуңынан... Эйе, быуын нығытып, ергә аяғыңды ныҡлы терәп торған егет булып ҡайтып, һөйгәнеңә өйләнеп ғаилә ҡороу, йорт һалыу, ағас ултыртыу, балалар бағыу... Тырыш, өлгөлө, матур йәш ғаиләләрҙе ауылдарҙа ғына түгел, ҡалала ла күреп торалар, улар өсөн төрлө ярҙам саралары булдырыла, конкурстар уҙғарыла. Әйткәндәй, быйыл Өфөлә 22-се тапҡыр "Йәш ғаилә" конкурсы үтте. Пандемия булыуға ҡарамаҫтан, тамашасыһыҙ, бары тик жюри һәм телевидение хеҙмәткәрҙәре алдында ғына сығыш яһаһалар ҙа, йәш ғаиләләр һынатманы. Ете районның ете иң шәп ғаиләһе "Ғаилә стендабы", "Ғаилә ҡиммәттәренең социаль рекламаһы", "Интеллектуаль КВИЗ" конкурстарында көс һынашты. Уның яҙмаһын 21 ноябрҙә киске сәғәт 6-ла "Вся Уфа" телеканалында ҡарарға һәм еңеүселәр менән танышырға мөмкин. Еңеүселәр шулай уҡ ҡала данын республика кимәлендә үткән конкурста яҡлаясаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘ!

**Өфө ҡала округы хакимиәте "Изге Өфө" хәйриә проектын башланы.** Ул ҡаланың педагогик, медицина һәм социаль ярҙам белгестәренең телефон аша консультатив һәм психологик ярҙам күрһәтеүен күҙаллай. Бынан тыш, проекттың мөһим бурыстарының береһе булып мохтаждарға ярҙам итергә әҙер битараф булмаған граждандар тураһында мәғлүмәт йыйыу тора. Хәйриә акцияһында ҡатнашыу өсөн колл-үҙәктең берҙәм телефонына 8-800-250-56-04 номеры буйынса шылтыратырға һәм үҙеңдең ярҙамыңды тәҡдим итергә кәрәк. Шылтыратыуҙар иртәнге 9-ҙан киске 9-ға тиклем ҡабул ителә. Проектҡа предприятиелар етәкселәре, эшҡыуарҙар, ирекмәндәр һәм автоирекмәндәр саҡырыла.

✓ **Баш ҡаланың М. Ғафури паркы артындағы урман һуңғы ваҡытта "ыҙғыш алмаһы"на әйләнә башлағайны. Унда төҙөлөш эштәре алып барылыуы күҙалланыуы арҡаһында ағастарҙы ҡырҡалар ине.** Быға халыҡ та, "йәшелдәр хәрәкәте" лә ҡаршы сыҡҡайны. Республика Башлығы Радий Хәбировтың "парк эргәһенә яҡын территорияла торлаҡ йорттар төҙөү мәсьәләһен ентекле анализларға" ҡушҡандан һуң хәл бер аҙ нормалләшкән кеүек булғайны. Әммә унан һуң да БР Башлығы ҡарамағындағы Кеше хоҡуҡтары буйынса совет ағзаһы Кристина Абрамичева Ғафури паркында урман ҡырҡыу туҡталмауын белдерҙе. 13 ноябрҙә Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы төҙөлөш эштәрен алып барырға тейешле компанияға Рихард Зорге урамы буйынса ағас ҡырҡырға рөхсәт биргән билетын кире алған. "Был объект буйынса артабанғы ғәмәлдәр булып үткән Ҡала төҙөлөшө советының беренсе ултырышында ҡаралды", - тип белдерҙе ҡала хакимиәтенең мәғлүмәт-аналитика идаралығы начальнигы Марсель Байдәүләтов.

✓ **26-28 ноябрҙә Өфөлә "Беҙҙең Бренд" аҙыҡ-түлек йәрминкәһе була, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығынан.** "Йәрминкәлә Башҡортостан, Пермь крайы, Воронеж, Һамар өлкәләре һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренең фермер хужалыҡтарынан һәм компанияларынан сифатлы, экологик яҡтан таҙа аҙыҡ-түлек тәҡдим ителә. Беҙгә таныш маркалар ҙа, һатып алыусыларҙың йөрәген һәм магазиндарҙың сауҙа кәштәләрен яулап алыу өсөн яңы брендтар ҙа килә", - тип билдәләне Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат секретары Алмаз Ғәлимов. Йәрминкәлә шулай уҡ сырҙар һәм һөт ризыҡтары, ярымфабрикаттар, ит һәм колбаса, кондитер изделиелары була. Ошонда уҡ экопродукттар, бал, төрлө эсемлектәр етештереүселәр менән танышырға мөмкин. "Унда 11 номинация буйынса "Беҙҙең Бренд" иң яҡшы аҙыҡ конкурсы ойошторола. Еңеүселәр алтын, көмөш, бронза миҙалдар һәм дипломдар менән бүләкләнә, - тип өҫтәне Алмаз Ғәлимов. - Конкурс еңеүсеһе бүләкләнгән продуктҡа билдә ҡуйғанда алған наградаһының логотибын файҙаланыу мөмкинлегенә эйә".

✓ **Быйыл 2019 йылдағы аномаль йылы ҡыштың ҡабатланыуы көтөлмәй, тип белдерҙе Рәсәй Гидрометүҙәгенең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд**. Уның белдереүенсә, быйыл ҡыш Рәсәйҙең Европа өлөшөндә һәм тотош илдә былтырғыға ҡарағанда һалҡыныраҡ һауа торошо фаразлана. "Әгәр йылытыу миҙгеленә комплекслы фараз буйынса фекер йөрөткәндә, ил биләмәһендә температураның нормаға ярашлы булыуы күҙаллана... Йәғни ҡыштың былтырғынан һалҡыныраҡ, ләкин, дөйөм алғанда, һыуыҡ булмауы көтөлә", - тине Рәсәйҙең баш синоптигы. Шул уҡ ваҡытта уның һүҙҙәренсә, илдең Европа өлөшөнөң төньяҡ яртыһында, Урал федераль округында, Себерҙең көнбайыш һәм урта өлөшөндә ҡыш көнө һауа температураһы норманан юғарыраҡ булыр, моғайын. Ләкин ҡышҡа аныҡ фараздар бирергә әлегә иртәрәк. Роман Вильфанд билдәләүенсә, ноябрь аҙағында Рәсәйҙең Европа биләмәһендә ҡар көтөргә мөмкин. Ләкин илдең Азия биләмәһендә, Уралда, Себерҙә әле үк ҡар күп.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сөгөлдөр

❖ Сөгөлдөрҙө бешереп, ваҡ ҡырғыстан үткәрергә һәм киптерелгән емеш-еләкте емшетеп ҡушырға (инжир, йөҙөм, күрәгә һ.б). Киви һәм әрселгән алма, бер аҙ тоҙло кәбеҫтә, бер телем тоҙло ҡыяр өҫтәргә. Булһа, петрушка, укроп, йыуа ла турарға. Бер әҙерләгән салат 3-4 көнгә етә, уны һыуытҡыста һаҡларға. Ашарҙан алда бер десерт ҡалағы алма һеркәһе һәм бер ҡалаҡ үҫемлек майы ҡушырға. Был салат ашҡаҙан-эсәк ауырыуҙары булғанда файҙалы. Иртәнге аштан 1,5 сәғәт алда бер ҡалаҡ бал ҡушып 1 стакан йылы һыу эсергә. Шулай уҡ көн һайын эсте 50 тапҡыр сәғәт теле буйынса, шунан кирегә һыйпап массаж яһау ҙа ярҙам итә.

### Гөлбаҙран

❖ Гөлбаҙран (пижма обыкновенная) сәскәһе төнәтмәһе өс нәмәнән дауа: ашҡаҙан язваһын дауалай, үтте ҡыуҙыра, эсәктәрҙе таҙарта. Уны әҙерләү өсөн 1 балғалаҡ ваҡланған гөлбаҙран сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, сәй кеүек бешерергә. Төнәтмәне көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда эсергә. Иҫкәрмә: гөлбаҙран ағыулы үҫемлек, унан әҙерләнгән дауаны саманан артыҡ ҡулланыу тыйыла.

### Имбир

❖ Ҡанды шыйығайтыу өсөн имбир тамыры (4 см ҙурлыҡта), семтем дәрсен, 1 балғалаҡ йәшел сәйҙе ҡушып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 15 минут төнәтеп, һөҙөргә. Төнәтмәгә лимондың яртыһын һәм теләгәнсә бал ҡушырға. Дауаны көн дауамында эсеп бөтөргә.

### Мандарин

❖ Шәкәр диабеты булғанда 4 мандаринды әрсеп, ҡабығын ваҡлап, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм ярты сәғәт ҡайнатып, һөҙөргә. Барыһын да 3-кә бүлергә: тәүҙә бешкән ҡабыҡты ашарға, аҙағынан ҡайнатманы эсергә һәм 2 бүлкә мандарин ашарға. Ошо рәүешле ике аҙна дауаланыу шәкәр кимәлен ярайһы уҡ түбәнәйтә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*✓ Көньяҡ райондарҙа иген үҫтерелә, әммә заманса тирмән булмағанлыҡтан, улар йыйып алған уңышын күрше Силәбе өлкәһенә арзанға һатып, унда эшкәртелгән әҙер продукцияны кире ҡиммәт хаҡҡа һатып алырға мәжбүр.*



ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

Республиканың көньяҡ-көнсығышында орнамент күп төҫтәрҙә ҡулланыу яҙрамында түгел, ә төрлө ҙурлыҡтағы ҡорамаларҙы берләштереп ҡатмарландырылған. Был осраҡта ҙурыраҡ ҡыя шаҡмаҡтар һәм өсмөйөштәр уртаға тупланған. Төрлө ҙурлыҡтағы фигуралар ҡатнашмаһында ике-өс төҫтә ҡулланып ҡына оҫтабикә ижади һәләттәрен сағылдырған.

Урал аръяғының көнсығышында, бигерәк тә Ҡурған өлкәһендәге башҡорт ауылдарында, XX быуаттың икенсе яртыһында ҡорама иң киң таралған ҡул эшенән һаналған һәм орнаменттары матурлығы менән айырылып торған. 1972 йылғы экспедиция барышында был әйберҙәрҙең күбеһе төҫлө слайдтарға төшөрөлгән. Төҫлө фотоларҙың икенсе серияһы 1997 комплекслы экспедиция һәм шәхси сәфәрҙәрҙә һәҙәмтәһендә тупланған.

Ғәҙәттә, ҡорама менән юрғандың йөҙө түшәмдәрҙең өҫкө яғы биҙәлгән. Урал аръяғында ҡайһы бер ҙур әйберҙәрҙә 15-20 төр туҡыма тотонолған, шул уҡ ваҡытта диагональ буйынса теҙеп ҡоралған өсмөйөштәрҙән хасил булған шаҡмаҡтар, кәкерсәктәр, "шыршылар" төҫө биҙәктә кире ҡабатланмаған.

Яҡуп ауылындағы ҡыҙыл юрғанда (Силәбе өлкәһенең көнсығышында урынлашҡан) тигеҙ яҡлы өсмөйөштәрҙән төҙөлгән "шыршылар" орнаментында төҫтәр түбәндәге рәүештә урынлашҡан булған: ҡара - алһыу зәңгәр - ҡара/күк (был биҙәкле тауарҙа өҫтөнлөк иткән төҫ) - ҡыҙғылт һары - ҡара күк - сағыу һары - көрән - күк - ҡыҙыл - шәмәхә. Икенсе бер ҡыҙыл юрғанда кәкерсәк сүрәтле биҙәк былай төҙөлгән: көрән - күк - ҡыҙыл - күк-йәшел ( киң ҡайма төҫө) - ҡара - ҡыҙғылт һары - шәмәхә - көрән - ҡара күк - ҡыҙыл (был биҙәкле тауарҙа өҫтөнлөк иткән төҫ) - алһыу зәңгәр - ҡыҙғылт һары - аҡ/алһыу (был биҙәкле тауарҙа өҫтөнлөк иткән төҫ) - ҡуйы ҡыҙыл - күк - аҡ/йәшел (был биҙәкле тауарҙа өҫтөнлөк иткән төҫ).



*Төрлө төҫлө ҡорама юрған. (Силәбе өлкәһе, Ҡыҙыл Армия районы, Яҡуп ауылы). Автор фотоһы. 1972*

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Пермь крайында үткән Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре сиктәрендә ике төбәк эшҡыуарҙары, Башҡортостан, башҡорттар күпләп йәшәгән башҡа төбәк ҡоролтайҙары вәкилдәре ҡатнашлығында онлайн Бизнес-ҡоролтай эшлекле форумы ойошторолдо.**

# АУЫЛДАРҘЫ ҺАҠЛАУ...

## бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ла бәйле

Мәғлүм булыуынса, был тармаҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ойошторолғандан алып иң мөһиме һәм әһәмиәтлеһе булып торһа ла, башҡа йүнәлештәрҙән айырмалы, ниңәлер үҙ юлын, үҫешен таба һәм ныҡлап аяғына баҫып китә алмай. Хатта Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң Башҡорт бизнес-үҙәге лә ойошторолоп, бер ни тиклем ыңғай эштәр эшләнгәйне, әммә ойошма рәйесе алышыныу менән уның эшмәкәрлеге һүнеп ҡалды, ҡыҫҡаһы, рәйестәр алышыныуы эшмәкәрлектә эҙмә-эҙлелектең булмауын асып һалды: яңы һайланған етәкселек үҙенсә эшләй башлай, алда башланған инициативалар онотола. Шуға онлайн-форматтағы әлеге эшлекле форумда ҡатнашыусыларҙың да был эшмәкәрлеккә яңылыҡ тип билдәләүе аңлашыла. Был уларҙың быға тиклем эшләп килгән ҡоролтайҙарҙың эше тураһында хәбәрҙар булмауын ғына күрһәтте. Ә бит бөгөн республикала үҙ эшен асып, уңышлы эшләп килгән исемдәре билдәле эшҡыуарҙар ошо бизнес-үҙәк эшмәкәрлеге һәҙәмтәһендә барлыҡҡа килде.

Әлеге сараға килгәндә иһә, унда Ҡоролтай Башҡарма комитеты һәм Президиумы вәкилдәре, комиссиялар рәйестәре һәм кураторҙары, башҡорттар компактлы йәшәгән төбәктәр башҡорттары ҡоролтайы вәкилдәре, эшҡыуарҙар, БР Ауыл хужалығы министрлығы вәкилдәре ҡатнашты. Эшлекле форумда ике йүнәлеш - ауыл хужалығы продукцияһын етештереүсе эшҡыуарҙарға, үҙмәшғүлдәргә ярҙам һәм туризм тармағын үҫтереү мәсьәләләре, яңы проекттар ҡаралды.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының Эшҡыуарлыҡ буйынса комиссияһы координаторы Рәшит Ғилманов башҡорт бизнесының торошо һәм үҫеш перспективалары менән таныштырҙы. Уның сығышынан мәғлүм булыуынса, бөгөн дәүләттең коронавирус пандемияһы һәҙәмтәһендә килеп тыуған көрсөктөн иктисади әҙемтәләрен бөтөрөү мөмкинлеге сикләнгән, шуға күрә ярҙам бары тик ҙур бизнесҡа ғына күрһәтелә, бәләкәй бизнес күпләп ябыла. Статистика буйынса, Башҡортостан урта һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү буйынса федераль финанслау күләме буйынса Мәскәү өлкәһенән ҡала икенсе урында торһа (300 миллион һум), был ярҙам һәр 40-сы субъектҡа 140 мең һум күләмендә барып етә. Ул бары тик компьютер, лицензия һәм 1С лицензия программаһы алырға ғына етә. Ә Башҡортостанда, 2016 йылғы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, крәҫтиән-фермер хужалыҡтары 4,5 мең, шәхси ярҙамсы хужалыҡтар 600 мең субъект иҫәпләнә. Әммә улар ҙур бизнес менән ярыша алмай. Был продукцияның сифаты төшөүгә килтерә, ә бәләкәй эшҡыуарлыҡ өсөн муниципалитеттар үткәргән йәрминкәләр - диңгеҙҙәге тамсы кеүек кенә. "Пандемия һәҙәмтәһендә халыҡтың килеме һәм түләү һәләте түбәнәйә, дәүләт ярҙамы бәләкәй бизнестың йәшәүен тәьмин итмәй, миграцияның башҡорт халҡының мәҙәни кодын төп һаҡлау урыны булған ауылды бөтөрөүгә килтергән ағымын туҡтата алмай. Бәләкәй формалағы хужалыҡтар етештергән продукцияһын һата, һәҙәмтәлә, килем ала һәм үҫешә алмай. Әммә был хужалыҡтарҙың экопродукция етештереүҙә өҫтөнлөгө күп, һәм беҙ уларға ҙур бизнесҡа дәғүә итерлек, дәүләт институттарына йөгонто яһарлыҡ мөмкинлектәр булдырырға тейешбеҙ", - тине Рәшит Рифғәт улы.

Был йәһәттән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан төбәктәң АПК кластеры һәм Башҡортостандың социаль ҡулланыусылар кооперативы менән берлектә бәләкәй эшҡыуарҙарҙың продукцияларын һатыуҙың һәҙәмтәле юлдарын эҙләүе билдәләндә. Маҡсат - сауҙаның заманса алымдарынан алып икенсе кимәлдәге, һорау, тәкдимдәр тураһындағы мәғлүмәт даими яңырып торған киң кооперация тармағын төҙөү. Бының өсөн район, төбәк ҡоролтайҙарында муниципалитеттарҙың бизнес-шерифтары, төбәктәрҙәге вәкиллектәр, сауҙа нөктәләре, эшҡыуарҙар менән бәйләнештә булып, уларға кәрәкле тауар тураһында мәғлүмәт туплап, Ҡоролтай линияһы аша Башҡортостан фермерҙарының, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәрҙең тауарҙарын һатыуҙы көйләүсе махсус логист структураһын булдырыу.

Бәләбәй эшҡыуары Раян Хәлиуллиндың Ҡоролтайға ҡарата тәнҡит һүҙҙәре лә, уның эшлекле тәкдимдәре лә ҡатнашыусылар тарафынан аңлап ҡабул ителде, сөнки ашаған белмәй, тураған белә, тигәндәй, тап шул өлкәлә ҡайнап йөрөүселәр генә башҡорт эшҡыуарлығының хәлен яҡшы аңлай. Раян Хәлиуллин Ҡоролтай ҡарамағында бизнес-мәктәп асып, унда тәжрибә уртаҡлашыу, йыл һайын һайлап алып 100 кешене уҡытыу, шуларҙың 10-һын 5 йыл эсендә доллар миллионеры итеү маҡсатын ҡуйыу зарурлығы тураһында белдерҙе. Шулай уҡ үҙмәшғүл, эшҡыуар, бизнесмен терминдарын да урынлы ҡулланырға, халыҡтың башын бутамаҫҡа саҡырҙы. Юҡһа, ҙур капиталдар менән эш иткән кеше лә бизнесмен, ауылда 15 һарыҡ тотоп, уны һатып килем ала алмағаны ла бизнесмен...

Раян Хәлиуллиндың фекерен күтәрмәләп, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, эшҡыуарлыҡ комиссияһы кураторы Рәсих Хәмитов ысынлап та бөгөн ауыл ерендә йәшәүсе, эшләүселәрҙең хәле еңел булмауын белдерҙе. Райондар буйлап Татарстан, башҡа төбәктәрҙән килеп осһоҙ ғына хаҡҡа бер йәшлек тана-үгеҙҙәрҙе, оло малдарҙы йыйып йөрөүселәр күбәйеүенә, халыҡ, үҫтергән малын ситкә сығарып һатыу мөмкинлеге булмағанлыҡтан, уларҙы бушҡа тигәндәй тоттороп ебәрергә мәжбүр булыуына баҫым яһаны. Тағы бер проблема: мәҫәлән, көньяҡ райондарҙа иген үҫтерелә, әммә заманса тирмән булмағанлыҡтан, улар йыйып алған уңышын күрше Силәбе өлкәһенә арзанға һатып, унда эшкәртелгән әҙер продукцияны кире ҡиммәт хаҡҡа һатып алырға мәжбүр. Ҡыҫҡаһы, Башҡортостанда сеймал етештерелә, әммә уны эшкәртеү проблемаһы хәл ителмәгән. Был бөгөн генә күтәрелгән тема түгел, уны шулай уҡ ҡоролтайҙың һәр яңы составы күтәрә, әммә йөк кенә урынынан ҡуҙғалмай...

Ә нимә эшләргә мөмкин? Рәсих Әгзәм улының фекеренсә, "Башҡорт халҡын үҫтереү стратегияһы" булмауы барлыҡ яҡшы уй-фекерҙәрҙе тормошҡа ашырыуҙы тотҡарлай. Уның буйынса иҡтисадты, ауыл-хужалығын үҫтереү системаһы эшләнергә һәм эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырылырға тейеш. Әйткәндәй, Рәсих Әгзәм улы Бизнес-ҡоролтай эшлекле форумы буйынса ла ҡарар сығарып, унда ошо стратегияны ҡабаттан тергеҙеүҙе лә индерергә тәҡдим итте. Һәҙәмтәһен ваҡыт күрһәтер. Һәр хәлдә, яҡшыға өмөт итәйек.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Пермь крайында үткән Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғрифәте көндәре сиктәрендә "Пермь крайының бай мәҙәниәтендә Урал башҡорттары" тигән темаға түңәрәк ҡор ҙа ойошторолдо. Ул Ғәйнә ырыуы башҡорттары этнографияһына, Пермь крайы башҡорттарының тарихына һәм үҫеш перспективаларына, шулай уҡ край башҡорттарының милли кейемдәре үҫеше үҙенсәлектәренә бағышланды. "Пермь крайы башҡорттарының үҫеш үҙенсәлеге булып уларҙың "утрау" булып айырылып тороуында. Ошо тормош рәүеше Барҙым башҡорттарына матди һәм рухи мәҙәниәттәренең архаик һыҙатын һаҡлап алып ҡалырға ярҙам иткән. Улар дөйөм башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеү һәм һаҡлап ҡалыу өсөн ҡулланыу мөмкин булған мираҫ булып тора. Пермь крайы башҡорттарының урындағы климат үҙенсәлектәре йөгонтоһонда барлыҡҡа килгән үҙенә башҡа "төньяҡ характеры" формалашҡан һәм ул гөрөфғәҙәттәргә лә йөгонто яһаған. Шундай традицияларҙың береһе - таҫтамалдарҙағы йөкһ үҙенсәлекле түбәтәйҙәр тегеү технологияһындағы Ғәйнә йөкһ Барҙым биҙәге. Рәсәй Фәндәр академияһы Пермь ғилми үҙәгенең Тарих, археология һәм этнография бүлеге әле милли кейемдең ошо өлөшөн матди булмаған мираҫ объектының федераль исемлегенә индереү буйынса эшләй", - тип белдерҙе ошо фәнни ойошманың этнологик тикшеренеүҙәр секторы мөдире, РФА мөхбир ағзаһы, тарих фәндәре докторы Александр Черных үҙенең ҡорҙа һөйләгән телмәрендә.

Пермь крайында үткән сара сиктәрендә Барҙа районы үҙгәненң Барҙа ауылында Ғәйнә ырыуының легендар улы, Уса даруғаһының Ғәйнә олоҫо старшинаһы, Өфө провинцияһы башҡорттарынан Уложенная комиссия депутаты, Крәҫтиәндәр һуғышында Е. Пугачев ғәскәре полковнигы булған Туҡтамыш Ишбулатовҡа скульптура комплексы асылды. Комплекс бюстан һәм Ишбулатовтарҙың данлы ырыуы шәжәрәһенән тора.

Башҡортостан делегацияһы шулай уҡ Барҙа ауылында быйыл октябрҙә генә эшләй башлаған Башҡорт йәкшәмбе мәктәбе менән танышты. "Мәктәбебеҙ Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына лайыҡ булды. Дәрестәргә балалар ҙур теләк менән йөрөй. Башҡорт алфавитын өйрәнделәр, башҡорт телендә шиғырҙар, йырҙар өйрәнәбеҙ", - ти проект кураторы Альбина Әүхәҙиева. Башҡортостан ҡунаҡтары башҡорт йәкшәмбе мәктәбенең тәүге уҡыусыларына уныштар теләне. БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Әлфиә Ғәлиева башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетын йыһазландырыуға сертификат тапшырҙы.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*✓ Ғалим Асҡын районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә Инйәр буйындағы көнбайыш ҡатайҙарға хас булған тартынҡы өндәрҙең фонетик комплексы булыуына иғтибар итә.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БАЛЫҠСЫ ТИГӘН АТЛЫ, БАШҠОРТ ЗАТЛЫ ЫРЫУҘАНБЫҘ



Алдараҡ бәйән ителгән фаразды тағы ла бер тарихи факт ҡеүәтләп тора: ғәрәп тарихсыһы Әл-Масуди IX быуат аҙағында төрки ҡәүемдәре араһында һуғыш сығып, ҡапма-ҡаршы тороусы төркөмдәрҙең береһендә баджнак, баджгурд, йаджни һәм наукерда исемле ҡәүемдәр булыуы хаҡында яҙа. Бында аталған наукерда халҡының исеме фарсы телендәге "яңы ҡала" тигәндән алынған: тимәк, былары ла ниндәйҙер "яңы ҡалалар" менән бәйле ҡәүем булып сыға. Р.Ғ. Кузеев тап шундай һығымта яһай ҙа инде: "Иран һүҙбәйләнеше наукерде "яңы ҡала кешеләре" тигәнде белдергән кеүек, төркиҙәрҙең балыҡсы, балыкчи тип әйтеүҙәре лә башта ҡалала йәшәүсе ултыраҡ тормошло кешеләрҙе, йәиһә боронғо ҡалалар периферияһындағы күскенселәрҙе аңлатҡан". Ошо ғалим үҙ фекеренә дәлил рәүешендә тағы ла бер башҡорт ырыуы этнонимын миҫалға килтерә. Башҡорттарҙа "ирәкте" исемен йөрөткән ырыу тармағы ла киң билдәле. Ә Ҡаҙан ханлығы осорона ҡараған тарихи сығанаҡтарҙа "ҡәлғә", "крепость" мәғәнәһендә ҡулланылған "ирәк" һүҙе лә осрай. Тимәк, ирәкте атамаһын алған башҡорт этник төркөмө лә ҡәлғәләрҙә хәрби хеҙмәт менән көн иткәне өсөн шундай исем алған, тип фараз итеп була.

Күренекле тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеевтың балыҡсы һәм ирәкте ырыуҙары атамаларының борон "ҡала, ҡәлғә һаҡсылары" мәғәнәһендә ҡулланылып, аҙаҡтан ошондай хәрби шөғөл менән көн итеүсе кландарҙың этнонимына әйләнеп китеүе хаҡындағы фаразы үтә ҡыҙыҡлы. Бында бер мөһим фактҡа иғтибар итергә кәрәк: башҡорт ырыуҙары Рус дәүләтенә ҡушылған замандарҙа (XVI быуаттың икенсе яртыһынан башлап) башҡорттарҙың ҡала йәки ҡәлғәләре булмай. Әммә тарихи Башҡортостан территорияһында бик күп "ҡаҙылма ҡалалар" табылыуы ла ысынбарлыҡҡа тап килә: күрәһең, VI быуаттың икенсе яртыһынан VIII быуат урталарына тиклем Төрки ҡағанаттары алып барған яуҙар барышындамы, бәлки, унан һуңғараҡ та - Алтын Урҙа осорона ҡараған яу-бәрелештәр һөҙөмтәһендәме - был боронғо башҡорт ҡалаларынан тик харабалар ғына тороп ҡала.

Боронғо башҡорт ҡалалары тураһында мәғлүмәттәр XII быуатта йәшәгән билдәле ғәрәп географы Әл Иҙриси тарафынан теркәп ҡалдырылған: ул башҡорттарҙың Кастра, Мастра, Гүрхан, Карукия ("Ҡараҡая" булыуы мөмкин) һәм Намджан ҡалалары хаҡында яҙа. Бында Кастраның Ҡас Тора, Мастраның Мас Тора, тип аталыуын фаразлап була, сөнки ул заман төркиендә "тора" һүҙенең "ҡәлғә" мәғәнәһендә ҡулланылыуы ихтимал. Әйткәндәй, һинд-европа телдәренән ингән "тура" һүҙе лә башня, нығытма мәғәнәһендә ҡулланылған, ә хәҙерге хакас телендә шул уҡ һүҙ "өй", "йорт" тигәнде белдерә. Әл Иҙриси хеҙмәттәрен бик ентекләп өйрәнгән белгес, тарих фәндәре докторы И.Г. Коновалова Намджан ҡалаһының ул замандағы сауҙа юлдарының береһе булған Яйыҡ (Урал) йылғаһы ярында, хәҙерге Орск ҡалаһына яҡын урында булыу мөмкинлеге хаҡында фараз итә. Ә Ҡараҡая ҡалаһы, Әл Иҙриси картаһына ярашлы, хәҙерге Өфө территорияһына тап килә.

Был яҡтарҙағы традиция буйынса ул замандарҙа ҡала биналары өсөн төп төҙөлөш материалы сифатында, башлыса, ағас йәиһә балсыҡ ҡулланыла. Әлбиттә, баҫҡынсылар менән барған яуҙарҙан һуң бындай ҡалаларҙан күҙгә ташланырлыҡ бер ни ҙә ҡалмай тиерлек. Ошоға дәлил итеп ҡасандыр сәскә атҡан Булғар ҡалаһын килтерергә була - 922 йылда Багдад хәлифе Әл Муктадир илселеге сәркәтибе Ибн Фаҙлан күргән башҡорттар шул уҡ Бөйөк Булғар ханлығы составына ингән халыҡтарҙан була. Булғар ҡалаһы тәүҙә монгол-татар яуы осоронда, 1236 йылда емертелһә, ә аҙаҡтан Урта Азия әмире Аҡһаҡ Тимерҙең Булғар ханы Туҡтамыш менән булған һәләкәтле яуҙары барышында, 1390 йылдар тирәһендә тулыһынса ҡыйратыла. Әйтергә кәрәк, башҡорт ырыуҙары яугирҙары ла ошо тарихи бәрелештәрҙә әүҙем ҡатнаша.

Әхмәтйән улы Нурмөхәмәт исемле кешенең шәжәрәһендә бына шундай юлдар бар: "Өфө ҡалаһы янында, Ағиҙел йылғаһында, уға Дим йылғаһы ҡойған ерҙә Ҡуңғырат ҡәлғәһе булды; уны төйәк итеүселәр бынан Ургенчҡа күсеп китте. Унда ҡәлғә төҙөнөләр һәм уны ла Ҡуңғырат, тип атанылар. Ағиҙел йылғаһында Ту-ра-тау тигән тау бар. Тура - ҡуңғырат ханының исеме. Ул ошо тауҙың түбәһендә, хәүефһеҙерәк булһын тип, ҡәлғә һалған. Шуның өсөн уны Ту-ра-тау, тип атағандар. Унда харабалар ғына ҡалған".

XIX быуатта йәшәгән башҡорт ғалим-мәғрифәтселәре үҙҙәренең ҡайһы бер әҫәрҙәрендә тарихи Башҡортостандың төньяҡ тарафтарында көн иткән башҡорт ырыуҙарының бер төп тамырҙан сығыуын иҫбатларға тырыша. Бының өсөн улар боронғо риүәйәттәргә мөрәжәғәт итә. XIX быуатта йәшәгән башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир Ғәли Соҡорой үҙенең "Тәзкирәтен әл-әхуан вә әләхбаб" ("Туғандарыбыҙҙың һәм яҡындарыбыҙҙың тарихын хикәйәләү"), тип аталған әҫәрендә 18 быуын ата-бабаларын теҙеп күрһәтә. Риүәйәт буйынса төп бабалары Майҡы бейҙең монголдарҙың Сыңғыҙ ханы заманында йәшәүе тураһында бәйән итә. Шәжәрәгә ярашлы, Майҡы бейҙең өс (йә дүрт) улы була - Ҡара Табын бей, Байҡы бей, Балыҡсы бей. Ҡара Табындың улы Мейәс буйҙарында йәшәгән Әхмәтшәйех була, ул Кама буйҙарына күсә, ә артабан ошо ерҙә Абдул улын ҡалдырып, хәҙерге Башҡортостандың төньяғына килеп төпләнә. Был шәжәрәлә ирәкте башҡорттарының ҡайһы ерҙәрҙә таралып ултырыуы һүрәтләнә. Улар күршеләре көҙәй, таҙлар, ҡайпан, гәрәй, уран, ғәйнә башҡорттары менән тығыҙ мөнәсәбәттә йәшәй. Шулай уҡ шәжәрәлә Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуында ҡатнашҡан Иҫән хандың өс тапҡыр батша Иван Грозныйға барыуы тураһында бәйән ителә.

Ғәли Соҡоройҙоң улы, яҙыусы Ғарифулла Кейеков, шулай уҡ боронғо риүәйәттәр һәм үҙенә билдәле булған шәжәрәләр нигеҙендә, атаһы төҙөгән Ирәкте шәжәрәһенә өҫтәмәләр индерә: "Ҡарасының (ҡушаматы буйынса - Ҡара Табын), йәғни Ҡарағәзиздең, элегерәк әйткәнемсә, Балыҡсы исемле оло улы була. Ә уның, үҙ сиратында, шулай уҡ дүрт улы була: беренсеһе - Танып, икенсеһе - Уйнар (моғайын, Унлар йәиһә Уннар. - **авт. иҫк.**), өсөнсөһө - Елдәк, дүртенсеһе - Йәнсәйет. Балыҡсының оло улы Таныптың ике улы була: беренсеһе - Ҡайпан, икенсеһе - Янапай". Ошо генеалогияла уртаҡ сығышлы булыу идеяһы нигеҙендә төньяҡ башҡорт ырыуҙарын - ирәкте, балыҡсы, байҡы, танып, ҡайпан, елдәк, унлар башҡорттарын берләштерергә тырышыу маҡсаты асыҡ күренә. Күрәһең, был идея уларҙың ата-бабаларына ла ят булмағандыр.

Хәҙерге тарихсылар балыҡсы, байҡы һәм ирәкте ырыуҙары башҡорттарының яҡын ҡәрҙәштәрҙән булыуын инҡар итмәй. Балыҡсы ырыуы аҡһаҡалдары һөйләүенсә, уларҙың ата-бабалары ҡасандыр Бәләбәй яҡтарында, ҡатай ерҙәрендә йәшәгән. Бында һүҙ Ыҡ буйындағы Ҡатай олоҫо хаҡында бара (Баҡалы районында әле лә Иҫке Ҡатай, Яңы Ҡатай ауылдары бар), әммә ҡатайҙар XVI быуаттың икенсе яртыһында көнсығышҡараҡ күсеп китеп, хәҙер билгән ерҙәрендә төпләнгән. Ә ирәктеләр шулай уҡ ҡасандыр Төй йылғаһы буйында, буласаҡ Балыҡсы олоҫо территорияһында йәшәп киткән. Ғарифулла Кейеков билдәләүенсә, ирәктеләрҙең бабаһы Ҡарағәзиз (Ҡара Табын ҡушаматлы) Муллаҡай тигән балыҡсы ауылына яҡын ерҙә ерләнгән була.

Алда бәйән ителгәндәр нигеҙендә бына ниндәй һығымта яһарға була. Этник сығыштары яғынан балыҡсылар менән ирәктеләр бер ырыуҙың - табындарҙың айырымланып киткән тармаҡтары булып тора. Әммә балыҡсыларҙың бер өлөшө, ниндәйҙер кимәлдә ҡатайҙар менән дә тығыҙ аралашып, туғанлыҡ мөнәсәбәтендә булған. Быны ғалим Р.Ғ. Кузеев та дөрөҫләй: балыҡсыларҙың ырыу тамғаһы - шул уҡ ҡатайҙарҙың бер ни тиклем үҙгәртелә биргән "балға" тамғаһы. Ғалим Асҡын районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә Инйәр буйындағы көнбайыш ҡатайҙарға хас булған тартынҡы өндәрҙең фонетик комплексы булыуына иғтибар итә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, бындай фонетик үҙенсәлектәр көнбайыш табындарҙың бер өлөшөнөң һөйләшенә лә үтеп ингән.

Балыҡсы ырыуының артабанғы тарихын бер ни тиклем кимәлдә батша Рәсәйе архивтарында һаҡланған документаль сығанаҡтар аша өйрәнеп була. Мәҫәлән, Көнгәр бургомистры Юхнев 1725-1726 йылдарҙа Себер даруғаһының Балыҡсы олоҫондағы 120 йортта "хәрби хеҙмәткә ярарлыҡ" 360 ир-ат булыуын теркәп ҡуйған. Әгәр ҙә ул заманда стандарт булған нисбәттән - һәр 5 кешенән берәүһенең генә хәрби хеҙмәткә алыныуын иҫәпкә алғанда, ошо олоҫта барлығы 1800-2000 самаһы башҡорт кешеһе йәшәүен фаразларға була. Ә 1730 йылда камерир Ю.Жилин, Өфөлә йәшәүсе С.Третьяков һәм И.Гавренев төҙөгән документта былай тип яҙылған: "Өфө йылғаһы һәм Төй буйындағы Балыҡсы олоҫо, тауҙар, урмандар, баҫыуҙар ҙур түгел; арба юлы унда насарҙан".

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

**Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ булыусылар:**

1. Рядовой Ғәлимов Имам Ғәли улы - 275-се атлы полк, 4-се эскадрон пулеметсыһы.
2. Лейтенант Гәрәев Миңлеғол Миңлегәрәй улы - 101-се атлы артиллерия дивизионының батарея командиры.
3. Лейтенант Колесник Никон Игнатьевич - 294-се полктың 4-се эскадроны командиры.
4. Рядовой Мәҡсүтов Искәндәр Хисаметдин улы - 275-се полктың 4-се эскадроны сабельнигы.
5. Лейтенант Минияров Максим Харитонович - 101-се атлы артиллерия дивизионының батарея командиры урынбаҫары.
6. Лейтенант Мирсаяпов Хөсәйен Ғата улы - 294-се полктың 3-сө эскадроны командиры.
7. Өлкән сержант Нуретдинов Низам Нуретдин улы - 275-се полктың сабельниктар взводы командиры.
8. Өлкән лейтенант Сабитов Фәрүәз Шәйех улы - 275-се полктың 4-се сабельниктар эскадроны командиры.
9. Өлкән лейтенант Сиреғолов Шәйхи Заһит улы - 294-се полктың 2-се сабельниктар эскадроны командиры.
10. Рядовой Хөсәйенов Ғатаулла Хөсәйен улы - 275-се полктың 4-се эскадроны сабельнигы.

**Ҡыҙыл Йондоҙ орденына лайыҡ булыусы яугирҙар:**

1. Рядовой Абдуллин Ғарифулла Ғәйфулла улы - 275-се полк пулеметсыһы.
2. Рядовой Әбүталипов Исмәғил Исхаҡ улы - 275-се полктың полк батареяһы орудиеһы наводчигы.
3. Старшина Әлибаев Ғәлим Абдулла улы - 275-се полкта орудие командиры.
4. Батальон комиссары Әлибаев Сәғит Рәхмәт улы - 275-се полк комиссары.
5. Капитан Әлибаев Шаһикамал Әлибай улы - 294-се полктың 1-се эскадроны командиры.
6. Батальон комиссары Әхмәтов Хәйрулла Нурғәли улы - 294-се полк комиссары.
7. Рядовой Әхмәтшин Әхмәҙулла Әхмәтйән улы - 294-се полк сабельнигы.
8. Лейтенант Әхтәмов Ислам Әхтәм улы - 313-сө полктың 2-се эскадронының взвод командиры.
9. Сержант Баканов Сәйфулла Ғиззәт улы.
10. Кесе лейтенант Бикмәтов Ниғмәт Ишмырҙа улы.
11. Рядовой Ғарипов Шәйхулла Ғариф улы.
12. Өлкән лейтенант Ғәзимуллин Әнүәр Фатих улы.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Урал тауҙары төбәге ул үҙе үк абсолют сәләмәтлек һәм абсолют хәүефһеҙлек зонаһы. Был ерҙәр туфан һыуынан йотолмаған. Был ерҙәрҙә ер тетрәмәй, убылмай, тәбиғәте бай һәм төрлө, шифалы үҫемлектәре бихисап.*



# ХАЛЫҠ АҠЫЛЫНА УРАУ ЮЛ

**Интернет киңлектәре аша әүҙем эш алып барыусы психолог Рөстәм КӘЛИМУЛЛИНдың терапияларына иғтибар итмәү мөмкин түгел. Бөгөнгө ошо өлкә белгестәренә хас булғанса оҙон телмәргә түгел, ә дауалау-һауыҡтырыу креатив-хәрәкәт методтарына нигеҙләнгән уның сығыштары. Эшмәкәрлегенең "Урал батыр" эпосына бәйле булыуын да аңлағас, психолог менән осрашып һөйләшеү сараһын таптыҡ.**



**▸ Рөстәм Ғәлим улы, һеҙ был методиканы уйлап сығарҙығыҙмы? Йәиһә, ҡайҙан алдығыҙ?**

- Ер йөҙөнөң күп халыҡтарында интуиутив рәүештә барлыҡҡа килгән һәм быуаттар, дәүерҙәр ағышында иҫбатланған, нығынған дауалау саралары бар. Йән һәм тән сәләмәтлегенә, рухи үҫешкә бәйле был практикалар. Беҙ, мәҫәлән, йән һәм тәнде сыныҡтырыуға килһәк, тотабыҙ ҙа был өлкәне башҡа халыҡтар, илдәр, цивилизациялар киңлегенән эҙләйбеҙ. Һиндтарҙың йогаһына, япондарҙың медитацияһына, көнсығыш медицинаһына, алтай үләндәренә һәм башҡаларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Ҡайҙалыр Гималай тауҙарына, Кавказ бейеклектәренә, диңгеҙ-океан сиктәренә йән тыныслығы эҙләп китәбеҙ. Ә асылда бөтөн ауырыуҙарға ла дауа беҙҙең үҙебеҙҙә бар.

Ғүмер буйы тәбиғәттең бер өлөшө булып йәшәгән башҡорт халҡының үҙенең йән һәм тән дауалары, шифалары, йәғни этнотерапияны булған һәм бар. Имләү, өшкөрөү, һылау, арбау кеүектәре лә, ауырыуҙы тәбиғәт ярҙамы менән тәндән һәм йәндән сығарыу ҙа, ырымдар-ышаныуҙар ҙа - былар барыһы ла бер быуатлыҡ йәки бер дәүерлек кенә тәжрибә түгел. Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө көнгәсә беҙҙең дауалау практикаһының бик бәләкәй генә фрагменттары килеп еткән. **Халыҡ дингә килгәс, был ысулдар дин тарафынан ҡыҫырыҡланһа, шул идея менән бергә килгән ғәрәп-фарсы медицинаһы көсләп тағылһа, совет власы иһә үҙ медицинаһын һәм аңын индерһә - милләттең боронғо үҙен һаҡлау һәм ҡурсалау саралары шулай юҡҡа сығарыла. Беҙгә ситтән килгән бөтә идеялар ҙа беҙҙе милләт булараҡ юғалтып, оло халыҡ массаһына ҡушырға һәм шул арҡала ҙур көс тупларға теләй. Ә был көс мотлаҡ икенсе көскә ҡаршы тороу, икенсе көстө баҫыу, ҡурҡытыу сараһы ғына. Унда эләккән бәләкәй милләттәр иһә үҙ асылдарын юғалтып, ят дауалар, ят аҙыҡтар ҡулланып, ят мәҙәниәтте ҡабул итеп, милләтһеҙ-ерһеҙ-тамырһыҙға - маңҡортҡа әйләнә.**

**▸ "Урал батыр" эпосына бәйле методикағыҙҙы асыҡлап китегеҙ әле?**

- Эпостың төүге юлдарында уҡ шундай юлдар бар:

*Ауырыу-һыҙлау күрмәгән,*
*Үлем барын белмәгән,*
*Барлыҡ нәмәгә үлем*
*Үҙебеҙ тип һанаған.*

Тимәк, беҙҙең тәүге ата-бабаларыбыҙ ауырыу-һыҙлауҙы белмәгән бик оҙон ғүмерле кешеләр булған. Тимәк, улар үтә лә сәләмәт тәнле, унан да бигерәк, сәләмәт рухлы итеп яратылғандар. Йәнбирҙе менән Йәнбикә улар йәшәү энергияһын һаҡлай алған, әҙәми ресурстарын дөрөҫ тотона белгән, тормоштоң мәңгелеген һәм сикһеҙлеген аңлаған йәндәр. Быларҙы төшөнгәндә һин уларҙың йыһан һәм ер менән бәйле тәбиғәт есемдәре икәнен күрәһең. Тимәк, абсолют сәләмәтлек беҙгә хас!

Артабан, Урал батырҙың бала сағы, үҫмерлек осоро һәм батыр юлы һүрәтләнгәндә лә, Йәншишмә эҙенән барғанында ла уның йәнен ағыуларға, арбарға тырышыусылар күп булыуын да, шунда ла батырҙың үҙ рухын сәләмәт һаҡлап ҡалыуын күҙәтәбеҙ. Ә Шүлгән бала сағында уҡ йән сиренә дусар була, йәғни тыйылған ҡанды эсә. Һығымта ниндәй? Йәнде һаҡлау. Үлемдән генә түгел, ә төрлө насар йоғонтоларҙан һәм шул иҫәптән ҡара уй, көнсөллөк, хөсөт, асыу, боҙоҡлоҡ кеүек үҙ фигелендәгенән дә йәнеңде һаҡлау мотлаҡ.

**▸ Һеҙҙең интернет экрандары аша алып барған практикағыҙ, тимәк, беҙҙең боронғо халыҡ терапияны...**

- Эйе. Миҫалға алғанда, мәҫәлән, башҡорттоң йыр-моң фольклоры ла дауалаусы методика. Бейеүҙәр табанға ныҡ баҫып, йәғни, ерҙе тойоп, унан көс-илһам алып йөрөү билдәһе. Оҙон көйҙәр үпкәне, тын юлдарын асыусы, һауа, йыһан менән бәйләнешкә индереүсе алым. Былар барыһы ла тәбиғәт менән тығыҙ бәйлелек ул. Урман, дала, һыу буйҙарын ҡыҙырыу, үҙ алдыңа ҡысҡырып йырлау йәки һөйләшеү тынысландырыусы, негатив эмоцияларҙан ҡотолдороусы ҡеүәтле алым. Беҙгә бөгөн тап ошолар етешмәй. Беҙ эске тойғоларыбыҙҙы йәшереп, төрлө сикләүҙәргә бикләнеп, хатта тауышыбыҙҙы ла баҫып һөйләшеп йәшәргә мәжбүрбеҙ. Ҡысҡырып һөйләшкән кешегә юҡҡамы ни: "Урманда йөрөйһөңмө әллә?" - тиҙәр. Йәғни, урманда шулай мөмкин икәнде бит беләбеҙ, иҫләйбеҙ, был беҙҙең аң хәтере.

Минең "Урал батыр" атамаһына яҡынайтып "УРАУ" тип алған һауыҡтырыу-дауалау комплексы түңәрәк һәм спираль формаһында, сикһеҙлек образындағы хәрәкәттәр тупланмаһы. Бында дауалау физкультураһы, энергияны камиллаштырыу, эске һауыҡтырыу образдарын үҫтереү һәм башҡалар инә. Был күнекмәләрҙе башҡарған ваҡытта күҙәнәктәр бүленеү циклы эшләп китә һәм ошо арҡылы организм яңыра, йәшәрә, тип күҙ алдына килтерергә мөмкин.

Бая алда әйткәнсә, Йәнбикә менән Йәнбирҙе образдары - улар абсолют сәләмәтлек билдәһе. Улар сүрәтенә инеп, күнекмәләр яһағанда беҙ тәнде һәм йәнде сир йоғона алмаҫлыҡ сыныҡтырыуға өмөтләндерәбеҙ, оҙон ғүмерлеккә көйләйбеҙ. Урал батыр образында күнекмәләр яһағанда креатив-хәрәкәт терапияһының креатив-эшмәкәрлек терапияһына әүерелеүе тураһында әйтә алабыҙ. Был осраҡта фокус креатив хәрәкәттәрҙән ижади потенциалды асыуға күсә. Ә был үҙ сиратында маҡсаттарға, уй-ниәттәргә ирешергә, потенциалды үҫтереүгә, эшмәкәрлегендең аныҡ һөҙөмтәһен барлыҡҡа килтереүгә нигеҙ булып тора. Урал батыр образын ҡабул итә белеү һәм ошо юҫыкта йәнде һәм тәнде һауыҡтырыу бигерәк тә йәш ир балаларға, ир-егеттәргә, спортсыларға ярҙам итер ине. Уларҙа рухи көс, маҡсатлылыҡ, алған юлды аҙағынаса еткерергә, ҡатылыҡтан мәрхәмәтлелек тыуҙыра белеү кеүек асылдарҙы асып ебәрер ине.

Ҡатын-ҡыҙҙар өсөн Һомай образы бар. Йәғни, йәне-тәне саф һәм сәләмәт булған, нәзәкәтле, гүзәл, шул уҡ ваҡытта көслө рухлы ла ҡатын заты. Ул дошмандарына (беҙҙең осраҡта ауырыуҙарға) аҡыл көсө менән ҡаршы тора. Ә аҡыл көсөн әлеге лә йән һәм тән таҙалығы бирә.

Күнекмәләрҙә эпостан күк, ер һәм һыу донъяларындағы иң көслө кейек-ҡоштар ҙа алынған. Бөркөт, арыҫлан, суртан-балыҡ улар йыртҡыстар, әммә үҙ стихияларының батшалары. Уларҙан ҡырағай сәләмәтлек, маҡсатҡа ынтылышлы хәрәкәт-алымдар, еңеүсәнлек һәм шул уҡ ваҡытта аҡыл, тәбиғи тойомлауҙы, инстинкттарҙы тыңлап йәшәй белеү һабаҡтарын алырға була.

Күрәһегеҙ, "Урал батыр" эпосының һәр образынан, һәр юлынан рухи һәм физик сәләмәтлек алымдарын алып була.

**▸ Һеҙ был һауыҡтырыу-дауалау күнекмәләрен бөгөнгө пандемияға ҡаршы тороу юлы итеп тәҡдим итәһегеҙ, шулай бит?**

- Шул иҫәптән, пандемияға ҡаршы ла. Һәм башҡа кешелеккә янаған бөтән төрлө сирҙәргә лә ҡаршы торор көс итеп тәҡдим итәм. Бигерәк тә, беҙҙең халыҡ аҡылында, аңында, хәтерендә йәнен һәм тәнен сәләмәт тотоу, абсолют сәләмәтлек, оҙон ғүмерлек кеүек төшөнсәләр барлығын күрһәтергә теләйем. Урал тауҙары төбәге ул үҙе үк абсолют сәләмәтлек һәм абсолют хәүефһеҙлек зонаһы. Был ерҙәр туфан һыуынан йотолмаған. Был ерҙәрҙә ер тетрәмәй, убылмай, тәбиғәте бай һәм төрлө, шифалы үҫемлектәре, инеш-һыуҙары бихисап. Бында сирҙе бары тик йәне таҙа булмағандар ғына алып килә ала. Йәғни, кешеләрҙең тәбиғәткә ҡаршы ҡылған хаслыҡтарына яуап. Шул уҡ шахталар, карьерҙар, урмандарҙы ҡырҡыу, һыуҙарҙы ҡоротоу һәм башҡалар.

Эпостағы абсолют сәләмәтлеккә ынтылыу - ул иң беренсе йәнде һауыҡтырыуҙан, йәғни уйҙарҙы, ҡылыҡты, фекерләүҙе ыңғайға һалыуҙан, таҙартыуҙан, сафландырыуҙан башлана. Тәбиғәткә яҡынайыуҙан, уны йәлләй, тоя, ҡурсалай һәм ҡәҙерләй белеүҙән. Ерҙән көс-ҡөҙрәт ала белеүҙән, шул энергияны үҙең аша үткәреп, һауаға ыңғай тойғолар итеп сығара белеүҙән.

Әгәр һине ниндәйҙер сир килеп баҫты, ниндәйҙер вирус аяҡтан йыҡты икән, бында массовый ауырыу имеш кенә. Был сирҙе һинең йәнең тартты, тәнең шуны ҡабул итте. Ауырыуҙан алда һин көйефһеҙ, тынысһыҙ, толҡа тапмай йөрөнөң. Юҡ-барға конфликтҡа индең йәки эсеңдәге баҫымды сығара алмай, көйөп-яндың. Йәнең һиңә сигнал бирҙе! Үҙеңде өйрәнеү һәм аңлай белеү һабағы был.

Әлеге мәлдә Ерҙә бер ниндәй вирустарға ла, шул иҫәптән әлеге тажлыға ла, бирешмәй торған кешеләр ҡатламы барлығы асыҡланды. Был төркөмдөң иммунитеты һәм рух ныҡлығы ҡыҙыҡһыныу уята. Был хаҡтағы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһен киләсәктә күрербеҙ әле.

**▸ Эпостың гуманистик ҡеүәтен дә ҡулланаһығыҙ, тимәк, "УРАУ" терапияһында?**

- Иң беренсе урынға шуны ҡуябыҙ! Сөнки "Урал батыр" эпосы, ниндәй генә боронғолоҡтан килһә лә, изгелек һәм мәрхәмәтлеккә генә нигеҙләнгән. Унда иң баштан уҡ "Һуҡма. Үлтермә. Кәмһетмә." тигән йүнәлеш килә. Урал атаһына ағаһы Шүлгәнде һуйыл менән һуҡма, тип тыя. Яралы аҡҡошто үлтермәй ебәртә. Ата-әсәһе тыйған ҡанды эсмәй. Уның бөтөн ҡылған-атҡарғандары бары тик яҡшылыҡҡа һәм йәшәүгә генә ҡоролған. Тәрән гуманизм менән һуғарылған бөйөк әҫәр. Беҙҙең һауыҡтырыу-дауалау күнекмәләре маҡсаты ла Урал батыр йәненә, эштәренә яҡынайыу, уға рухташ булыу. Уның кеүек изге, яҡты, ярҙамсыл, батыр, сәләмәт, көслө булырға ынтылыу.

"УРАУ" күнекмәләрендәге ҡул, баш, кәүҙә өлөштәре аша күрһәтелгән түңәрәк, спираль, йәғни урауҙар ул йәшәү энергияһын тәндә хәрәкәт иттереү.

✓ ***Беҙҙең экспедиция ағзалары разведка эштәрен атҡарған ваҡытта әрәм-шәрәм ителгән йөҙйәшәр ҡарағай һәм ҡарағас урмандарын күреп тетрәндә. Был урмандарҙың яҡлауһыҙ булыуын күреп, ғәжәп ҡылдыҡ.***



Бында бер күнегеү ҙә осраҡлы йәки яһалма түгел. Һәр бер хәрәкәттә терапияның аныҡ маҡсаты - тән һәм йән сәләмәтлеге, рух ныҡлығы, күңел бөтөнлөгө ята.

Ҡуштауҙағы экологик күтәрелештә лә "УРАУ" күнекмәләрен яһап, рухи һәм физик көс алдыҡ. Йәгни, был күнекмәләр кешенең һәм тәбиғәттең бер бөтөнлөгө ул.

**Халыҡ медицинаһында, халыҡ фольклорында, йәгни халыҡ аҡылында бөгөнгө психологтарға ҡулланыр һабаҡтар күпме?**

- "Урал батыр" эпосындағы төрлө кодтарға бикләнгән, фәлсәфәләргә сорналған, йомаҡтар итеп йәшерелгән аңды асыу ғалимдарға ла, табиптарға ла, космос белгестәренә лә, ер-һыу белгестәренә лә һәм, әлбиттә, психологтарға ла һалынған. Һин һөнәрең буйынса кем булғанда ла эпостан үҙең төшөнгән изге аҡылды алып кешеләргә бирергә бурыслыһың. Һин был белемде йәшереп ҡалдырырға тейеш түгелһең. Хас Урал батыр кеүек, белемеңде, аҡылыңды, һәләтеңде, көсөңдө ергә яҡшылыҡ килтереүгә юлла. Был эпос юҡҡа ғына беҙҙә түгел, ул юҡҡа ғына шулай һаҡланып ҡалмаған һәм юҡҡа ғына тап ошо дәүерҙә улай популярлыҡ яуламай. Былар барыһы ла беҙҙең милләттең йәшәү юлы.

Борон халыҡ аңһыҙ булған да, бөгөн аҡыллы, тигән төптө хата фекер бар. Асылда, бөгөнгө күп асыштар боронғо аҡыл сатҡыһы. Халыҡ шул тиклем дә тәрән һәм нигеҙле аңға, көскә эйә, унда үҙен һауыҡтыра һәм юҡҡа сығара ала торған ике башлангыс та бар. Һәм бына ошо хаҡта иҫкәртә лә беҙгә "Урал батыр" кеүек ҡомарткыларыбыҙ. Мәсәлән, бөгөнгө эскелек бәләһе эпоста Зәрҡүм образында бирелә (эскелекте йылан сүрәтендә билдәләү). Бына, боронғо аҡыл милләткә шундай бәлә киләрен дә әйтеп ҡалдырған. Зәрҡүмде Һомай ситлеккә бикләй. Йәгни, ул беҙҙең эскелеккә ҡаршы көрәшеүсе иң беренсе ҡатын-ҡыҙ. Һәм эпос аҡылынан сығып, шул программаны эшкә ҡушырға була: беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар - Һомай вариҫтары - эскелекте юҡҡа сығарасаҡ, һәр хәлдә, ситлектә тотасаҡ та. Күрәһегеҙ бит, ошондай фәлсәфәләрҙе аңлағанда, аңды программалап һәм уңышҡа өлгәшеп була.

Тағы ла бер ҡыҙыҡ миҫал: беҙҙә көслө психологик йоғонтоға эйә булған өндәр, һүҙҙәр бар. Бына "Һ" өнө. Беҙ был өн менән ҡуша тын алабыҙ. "Һыу, һауа, һулыш, һөйөү" һымаҡ мөһим төшөнсәләрҙе аңлатабыҙ. Был өн ябай өн генә түгел, ә йән-тән тәрәнлегенә һалынған мираҫи байлыҡ. Унан бер тикшеренеү эшендә башҡорттарҙан "аҫаба" тигән һүҙҙе айырып алыу ниндәй эҙемтәләргә алып килгәнлеге асыҡланды. Был атамаһыҙ ҡалыу беҙҙе рухи яҡтан тарҡатасаҡ. Аҫтыртын ҡорал буласаҡ. Был психологик алым ғына түгел, был беҙҙең халыҡ белергә тейешле белем. Бөгөн ошоларҙың мәле етте. Беҙ ситтәр биргән аң-белем, аҙыҡ-түлек, дарыуҙар, кейем-һалым һәм башҡаларҙы ҡулланып, буталып, аҙашып йөрөмәйек һаман, ошо тәбиғәтебеҙгә, еребеҙгә сат йәбешеп, асылыбыҙҙы уятайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөйләшеү менән генә сикләнмәнек, күнекмәләр ҙә яһаныҡ. Ҡурай моңо аҫтында психолог менән Урал батырҙың тоткан юлы буйлап "хәрәкәт иттек". Был юлда ҡошҡа ла, арыҫланға ла, балыҡҡа ла әйләнергә, ерҙән көс алырға, шул энергияны һәр ағзаға юлларға, тәбиғәт менән гармонияға инергә, үҙебеҙҙән юғарыға ыңғай хистәр сығара белергә өйрәндек. Һәр хәлдә, ошоларға өйрәтә белеүсе уҡытыусы менән таныштыҡ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# "ГУБЕРНАТОР" АУЫЛЫНА СӘЙӘХӘТ

**Ҡырҡты тауҙары һырттарында, донъяның онотолған бер мөйөшөндә "Салауат совхозы" тип аталған хутор бар. Бөгөнгө көндә унда барып етер өсөн бик ныҡ ҡулайлашҡан техника, йә булмаһа, вертолет кәрәк...**

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында немец әсирҙәре төҙөгән был юлдан Ҡырҡты тауынан Магнит домналары өсөн ағас ташығандар. Тимәк, был юл ҡасандыр стратегик әһәмиәткә эйә булған. Әммә һуңғы йылдарҙа уның кәрәге ҡалмаған һәм уны ремонтлаусы ла юҡ, күрәһең. Унан ямғыр һәм яҙғы ташҡын һыуҙары йыуып, ҙур-ҙур суйыр таштарҙан торған үтә ныҡ ҡаршылыҡлы юл ғәләмәте генә тороп ҡалған...



Сибай һәм Магнитогорск ҡалаларын эсәр һыу менән тәьмин иткән берҙән-бер тәбиғи сығанаҡ булып тора.

Алда һөйләнәсәк хәл-ваҡиғалар Әбйәлил районы территорияһында урынлашҡан Салауат совхозы, йәгни "Губернатор" ауылы тураһында барасаҡ. Был ауылда һуңғы йылдарҙа берҙән-бер кеше - Нуретдинов Фуат ағайҙың йәшәгәне һәм үҙен ауылдың "Губернаторы" тип таныштырыуы тураһындағы мәҡәләләр республика матбуғатында бер нисә тапҡыр күренеп ҡалғайны. Нуретдинов Фуат сығышы менән Белорет районы Шығай ауылынан. Ул ғүмере буйы урман хужалығында эшләне һәм, Ҡырҡты урмандарына тоғро ҡалып, былтыр 80 йәшендә вафат булды. Йәне йәннәттә булһын, тип теләйһе генә ҡалды хәҙер.

Ошо бөткән ауылдың территорияһында бер-береһенән 300 метр самаһы ғына алыҫлыҡта Оло Ҡыҙыл һәм Бәләкәй Ҡыҙыл йылғалары башлана. Бәләкәй Ҡыҙыл - төньяҡҡа, ә Оло Ҡыҙыл көньяҡҡа табан юл ала. Был үҙе үк тәбиғәттеге үҙенсәлекле күренеш булып тора. Был йылғаларҙың икеһе лә Урал йылғаһының уң яҡ ҡушылдыҡтары булып, Әбйәлил районы ауылдарын,

Тәбиғәттең ошо үҙенсәлектәрен күҙ уңында тотоп, Әбйәлил активистары Рәсәй география йәмғиәте рәйесе Сергей Шойгу исеменә Ҡырҡты тауҙары биләмәһен айырыуса һаҡланған территория тип иғлан итеүҙе юллап мөрәжәғәт иткән. Сергей Шойгу был мәсьәләне урында өйрәнеү һәм тормошҡа ашырыу юлдарын табыу маҡсатында Рәсәй Фәндәр академияһы академигы А.А. Чибилев етәкселегендә экспедиция ойоштороорға күрһәтмә биргән. Экспедиция составына Әбйәлил активистары, Магнитогорск ҡалаһы вәкилдәре һәм Сибай институты ғалимдары индерелгәйне. Был сәйәхәткә сығыуыбыҙҙың сәбәбе ошо экспедиция составында булыуыбыҙ менән бәйле ине...

Ҡатмарлы юлдарҙы, дөрөҫөрәге, юлһыҙ урындарҙы махсус ҡулайлаштырылған 3 автомобилдә үттек. Ҡырҡты тауы аша һалынған алда һөйләнгән юл ғәләмәте Ҡужан ауылынан башлана. Был сәйәхәт сыҙамлыҡҡа һынау булды, йәгни, бынан да насар юл юҡтыр донъяла, тигән уйҙарҙы ныҡытты. Әйткәндәй, бынан 40 йыл элек ошо үк юлдан миңә "кәзә" мотоциклында (М-105) үтергә тура килгәйне. Ул ваҡытта юл "әлхәм" ине әле. Ваҡыт һәм ел-ямғыр донъяны бер туҡтауһыҙ үҙгәртә шул.

Уҙған быуаттың 70-80-се йылдарында Бәләкәй Ҡыҙыл йылғаһын Мораҡай ауылынан өҫтәрәк быуып, ғәйәт ҙур һыуһаҡлағыс төҙөү планы бар ине. Тик республика етәкселеге быға ризалыҡ бирмәне, ә аҙаҡ Союз тарҡалып китеү сәбәпле, был план тормошҡа ашмай ҡалды. М.З.Шакировтың позицияһы һөҡлангыс күренеш булған, тип фараз итергә генә ҡалды хәҙер. Ул план тормошҡа ашһа, Абҙаҡ ауылы һәм уның тирәләй урынлашҡан ял йорттары һәм туризм объекттары юҡҡа сыҡҡан булыр ине...

Уникаль тәбиғәтебеҙҙе йәрәхәтләй торған ҡурҡыныс пландар әле лә булып тора. Бынан бер нисә йыл элек сәнәғәтселәр Ҡырҡты тау буйындағы ошо Оло һәм Бәләкәй Ҡыҙыл йылғаларының башында төҫлө металдар сығарыу карьеры асыу маҡсатында разведка эштәрен башлаған. Тик урындағы халыҡтың был планға ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡаршылыҡ күрһәтеүе генә разведка эштәрен ваҡытлыса туҡтатҡан. Беҙҙең экспедиция ағзалары разведка эштәрен атҡарған ваҡытта әрәм-шәрәм ителгән йөҙйәшәр ҡарағай һәм ҡарағас урмандарын күреп тетрәндә. Был урмандарҙың яҡлауһыҙ булыуын, республика байлығының әләф-тәләф ителеүен күреп, ғәжәп ҡылдыҡ һәм, әлбиттә, республика Башлығы исеменә хат яҙҙыҡ. Был ерҙәрҙең тиҫтә йыл элек үк ҡурсаулыҡҡа дәғүә иткән территориялар исемлегенә индерелеүен һыҙыҡ өҫтөнә алып, протокол төҙөп, Рәсәйҙең география йәмғиәтенә, уның рәйесе С. Шойгу исеменә шулай уҡ хат ебәрелде.

Беҙ, экспедиция ағзалары, Ҡужан ауылы янындағы өлтөк ҡарағастарҙың бензобысҡы менән бысылыуы тураһында ла ишетеп тетрәндек. Бындай формалағы ҡарағастар донъяның башҡа урындарында юҡ. Ана шуларҙы вәхшиҙәрсә юҡ иткәндәр! Ниндәй ҡырағай, вәхши аҙәми заттар (кеше тип әйтергә тел бармай) менән бергә йәшәйбеҙ. Бик әсенеп яҙып ултырам был юлдарҙы, әммә был - хәҡиҡәт! Әгәр беҙ үҙ тәбиғәтебеҙҙе һаҡлауҙы бергәләп хәстәрләмәһәк, Ҡырҡты тауы ла, Урал һырттары да беҙҙең быуын әсендә үк өлтөк ҡарағастар һымаҡ юҡ ителергә көн кеүек асыҡ. Шуны аңларға тейешбеҙ: ошо тәбиғәтебеҙ менән генә беҙ байбыҙ һәм теүәлбеҙ.

Әйткәндәй, Ҡужан ҡарағастарын һаҡлап ҡалыу маҡсатында Өфөнән һәм башҡа ҡалаларҙан ашығыс юлға сыҡҡан волонтерҙар, белгестәр, ғалимдар килеп етте. Тәрәүҙәр ҡуйып булһа ла, ағастарға ярҙам итергә тырыштылар. Тәрәүҙәр ҡуйып ныҡытылған яралы ҡарағастар вәхшиҙәргә ҡарата "протест" билдәһе, кешелек донъяһына иҫкәртеү булыр, тип ышанғы килә.

**Сәфәрғәли ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы,**
**профессор.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ТЕЛӘНСЕ

Беҙҙән өй аша йәшәгән Әбдрәхим муллаға йыш инеп йөрөйөм. Уны гел генә намаҙлығы өҫтөндә тап итәм. Намаҙҙы боҙорға ярамағанлыҡты яҡшы белгәнгә, ишек төбөндәге ултырғыска менеп, һағып тынып ҡалам. Бына мулла хуш ҡылып, биттәрен һыпыра ла минең яҡҡа ҡайырыла:

- Килдеңме, балам?

-Килдем шу. Әсәйем саҙаҡаға бер сеүәтә бойҙай ебәргәйне, шуны инешләй тауыҡтарығыҙға һиптем!

- Ҡайһылай ҙа арыу иткәнһең, әйҙә, саҙаҡаңа доға ҡылып алайыҡ.

Әбдрәхим мулла уҡынырға тотона, мин дә үҙ сиратымда ҡулдарымды алға һоноп, шымтаям. Доға, ниһайәт, тамам.

- Олатай!
- Әү?
- Мөйөшкә ҡарап һин кем менән һөйләшәһең у?
- Хоҙай Тәғәлә менән.
- Уның менән нимә тураһында гәпләшәһең инде?
- Теләк теләйем.
- У һинең теләгенде тормошҡа ашырамы һуң?
- Шөкөр, һорағанымды урын-еренә еткереп, мәлендә, һуңламай ҡайтарып тора.
- Эх, ҡайһылай ҙа шәп! Миңә лә мулла булырға ине, белер инем нимә һорарға!
- Әлегә үҫ, булырһың! - Әбдрәхим мулла ирендәрен йыбырлатып тәсбихен тартып тынып ҡала, ә мин инде ултырып сыҙамай, урынымда борғаланам, өй эсендәге наҡыҫ ҡараптыныс күҙҙән үткәрәм, стеналағы кәкүкле сәғәткә күҙ атам.

Ары сыҙамым етмәй, хәбәр башлайым:

- Ошо ултырыуымда башыма бер аҡыллы уй төштө бит әле! Бабай һаҡалын һыпырып, көләмһерәп баға:
- Ниндәйерәк аҡыллы уй икән ул?
- Хоҙай Тәғәлә бөтәһен дә килтереп биреп тора, тинең, өйөң бәләкәй генә бит, һин унан батша һарайы һора, йәнә көмөш яллы арғымаҡ, шунан стенаңа алтын сәғәт!
- Нимәгә ул миңә бейек һарай, улым, өйөм былай ҙа яҡты һәм йылы. Көмөш яллы арғымаҡҡа булмаған хәлдә лә кәрәк ергә йәйәүләп һуңламай барып етәм, сәғәтем затлы булмаһа ла миңә тәғәйен алтын ваҡыт ағылып, тағатылып үтеп кенә тора. Илаһтан үҙемә бер ҡасан да, бер ни ҙә һорамайым...
- Кемгә у саҡта?
- Һиңә теләнселәйем, балам...

...Беҙҙең йорт янындағы супермаркет янында гел генә хәйер һорап ултырыусы мыҡым, зәғиф ҡатынды осратам. Ул мине күптән танып бөткән, әллә ҡайҙан абайлап ҡалып йылмайып ебәрә, усына аҡса һалһам, ҡатҡан ҡулдарын ауырлыҡ менән күтәреп, мөңгөрәп доға ҡыла. Әҙәм балаһы, асылда, теләнсе. Ул өҙләкһеҙ нимәлер теләй. Шул теләген тормошҡа ашырам тип йәшәй-йәшәй ҙә, ынтылғанына өлгәшә алмай, баҡыйлыҡҡа ла күсә ҡайһы саҡ. Ғүмерем буйы уҡыһам да мулла булып булманы, теләнсе кимәлендә генә ҡалдым, мәгәр теләктәрем гелән тормошҡа ашты: бәхет ҡошоноң ҡойроғонан да тотоп ҡараным, ете төн уртаһында абаға сәскә атҡанын да күрҙем, хыялым менән алыҫ йондоҙҙарға ла барып әйләндем. Әлеге мәлдә бер аятты ла белмәй тороп, теге ҡатын ише мөңгөрәп, ҡулдарымды юғарыға һоноп, бейек һарай, көмөш яллы арғымаҡ, алтын сәғәт һорамайым Хоҙайҙан, һеҙгә бары сәләмәтлек теләйем. Ә ҡалғаны теп-теүәл, бөп-бөтөн булып мәлендә килер һәм булыр!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

**✓ Эштән китеүе тураһында Сара әлегә берәүгә лә әйткәне юҡ - ире лә, улы ла, әсәһе лә белмәй. Илдар ағаһы менән Ләлә һеңлеһенә былай ҙа әйтмәҫ ине... Бер яҡтан, яҡындарын көйҙөрткөһө килмәй. Улар барыбер Сараға ярҙам итә алмай.**



Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# НИШЛӘҮЕҢ БЫЛ, САРАМ, ЙӘНКИҪӘК!

Повесть

## 1. Мышыны мин үлтермәнем

Сара иркен тын алды. Булды! Ул енеүсе! Была уның-сы дошманын да дөмөктөрҙө. Дошмандар ҡалманы. Көрәш бит бик ҡаты барҙы. Саранан күпме йылғырлыҡ, сослоҡ талап итте ул! Уйын... Была шулай инде нисәнсе көн Сара ноутбук алдында ултыра. Өйрәнмәгән уйыны ҡалманы, тиерлек. Көн һайын яңы бер уйын. Ҡалайтып булһа ла көндө үткәрергә кәрәк тә баһа! Унан уйынға әүрәп, мейене сүкегән уйҙарҙан арынаһың, эстә ҡайнаған асыу һүрелә.

...Сараны эштән ҡыҫҡарттылар. Была шулай. Бөтә ерҙә лә үтте бындай ҡаза. Гәзит-журналдарға ла ҡағылмай ҡалманы. "Телең оҙон, ҡай саҡ өндәшмәй ҡала белергә кәрәк! Ниндәй гәҙеллек талап итәһең баш мөхәррирҙән. Ил буйынса ошо уҡ хәл, ау-маркетинг һымаҡ эләктереп ала ла китә, ысҡыныу юҡ унан!" - тип үҙенсә йыуатҡан булды һөнәрҙәше Зилә. Холоҡто үҙгәртеп булмай шул. Сара гәзиттең яңы һандарын тикшергәндә унда баҫылған яҙмаларҙы тәнҡитләп тә ала торғайны шул. Үткерерәк, уҡымлыраҡ әйберҙәр бирәйек, халыҡ журналист һүҙенә ышанырға теләйеш, тип ныҡый ине. Үҙе һәр саҡ экологик теманы яҡтыртты, мәҡәләләрен сығартыр өсөн хужалары менән телләшеп тә ала торғайны, ләкин ул бит уҡыусыларҙың ихтыяжын яҡланы! Ә һөҙөмтәһе бына шулайыраҡ килеп сыҡты.

Эштән китеүе тураһында Сара әлегә берәүгә лә әйткәне юҡ - ире лә, улы ла, әсәһе лә белмәй. Илдар ағаһы менән Ләлә һеңлеһенә былай ҙа әйтмәҫ ине... Бер яҡтан, яҡындарын көйҙөрткөһө килмәй. Улар барыбер Сараға ярҙам итә алмай. Икенсенән, гәрләндерә лә, уларҙың йәлләүҙәрен, борсолоуҙарын күреү кемгә рәхәт булһын, ти? Намыҫланырлыҡ та... Сара үҙен ошоғаса үткер журналистарҙың береһе тип йөрөнө. Ҡай саҡ телгә килешһәләр ҙә, баш мөхәррир уның хеҙмәтен баһалай ине лә һуң, сөнки Сара Ғәбитова ҡайһы бер журналистарҙан айырмалы рәүештә, интернеттан әҙер материалдарҙы алып, шуны саҡ ҡына үҙгәртеп, гәзит битенә биреп ултырманы. Ул ижад кешеһе булды. Ашығыс хәбәр кәрәкһә, "неска" теманы асырға булһа, баш мөхәррир һәр саҡ Сараға мөрәжәғәт итте. Хаттар буйынса командировкаларға сыҡты, социаль мәсьәләләрҙе ҡыйыу яҡтыртты. Бәлки, хужа ҡылған эшенә үкенер ҙә, уны кире саҡырыр? Юҡ, саҡырған хәлдә лә, Сара хәҙер унда аяҡ баҫмаясаҡ. Тик йәтеш эш ҡайҙан табырға? Бөтә ерҙә лә ҡыҫҡартыуҙар бара! "Ныҡлап эшкә сумһам, былай ҙа ял итергә ваҡыт булмаҫ. Берәр ай ошолай йөрөйөм дә, шунан аҙаҡ белешә башлармын, мин бер эштән дә ҡурҡмайым",- тип йыуатты үҙен Сара.

Әлеге мәлдә ул өйҙә япа-яңғыҙы. Ире Рауил вахтовик булып байтаҡ йылдар Себерҙә эшләй. Рауил менән студент йылдарында танышҡайнылар. Уҡып бөтөү менән өйләнештеләр. Дөрөҫ, әсәһе ҡыҙын бик бай кешегә биреү тураһында хыялланғайны ла, тик хыялы тормошҡа ашмағас, күнде. Шулай ҙа, юҡ-юҡта, ҡасандыр ҡыҙы артынан йөрөгән Тимур Биккужинды телгә алғылай. Телгә алмаҫ ине, ул иптәш хәҙер ҡайҙалыр начальник булып ултыра. Рауил ғына Сараның йөрәген яуланы. Рауил Ғәбитов! Улар студент саҡта уҡ өйләнештеләр. Берҙән-бер улдары Ирек ун берҙе тамамлағас, быйыл Силәбе институтына уҡырға инде. Өфөлә ҡалғыһы килмәне, ҡырға китһә, үҙаллы тормош көтөргә өйрәнә, йәнәһе. Сара улын БДИға әҙерләнһен тип, былай ҙа артыҡ бәйләнеүсән булып киткәйне. Ярар, үҙаллылыҡҡа ынтылышына ҡаршы килеп булмай. Ир бала сынығыу үтергә тейеш, юҡһа, яңғыҙ бала иркәрәк булды. Әсә ҡоршауынан азат булырға тырышҡан Ирек, көн дә булмаһа ла, аҙнаһына бер нисә тапҡыр шылтырата. Хәйер, Сара ла сәбәп табып, йә кәңәш һораған булып, балаҡайына шылтыратмай ҡалмай. Бер-береһе өсөн бындай хәстәрлек, йәки телефон аша аралашыу ике яҡты ла ҡәнәғәтләндерә. Әле яңыраҡ ҡайтҡанында Ирек үҙенән өлкән "Лада" автомобилен дә алып китте. Был машина менән егерме йыл йөрөлдө, шөкөр. Ире Себергә китеп, вахта менән эшләй башлағас, Сара һирәк-һаяҡ үҙе йөрөштөрә ине, ни тиһәң дә, Өфө бәләкәй ауыл түгел, бик тә кәрәге тейеп ҡуя. Шуға ла ул иҫке "дуҫ"ын улына биргеһе килмәне. Тик баланың һүҙен кире ҡағыуы ла бик ауыр нәмә!

- Әсәй, һин машинаға һирәк ултыраһың. Ә миңә Силәбелә кәрәк. Беләһеңме, унда ҡайһы бер студенттарҙың ниндәй зәһәр автомобилдәре бар!

Машинаны алып китеүен ишеткәс, иркәйе Рауил асыуланды: "Ана, үҙе аҡса эшләй башлағас, теләгән маркаһын һатып алыр. Нимәне кәрәк тип әйтә, шуны йәнәтләп ҡулына тоттора һалаһың! Мәмәй ауыҙға әйләндерәһең бит егетте!"

Телефон зыңланы. Дисплейға күҙ һалыу менән Сараның ауыҙы йырылды, әсәһенең нимә уйлағанын, кисерештәрен һиҙгән, тиерһең, Ирек улы шылтырата! Сара көр тауыш менән өндәште.

- Улым, һаумы!

- Бара әкренләп... - Иректең тауышы үҙгәргән һымаҡ. Әллә көрһөндө?

- Әйт, улым, нимә булды? Берәй нәмә кәрәкме?

- Кәрәк шул... Тик һин асыуланма. Әрләмәйһеңме?

- Нимә булды?

- Әсәй, тик әрләмә. Мин авария яһаным.

Үҙ ҡолағына үҙе ышанмаған Сара ҡыҫҡырып ебәрҙе:

- Нимә? Имгәнмәнеңме?

- Юҡ.

- Ярай, улай булғас, - ҡатын иркен тын алды.- Машина яңы түгел. Инде ҡалайтаһың...

- Әсәй, мин гәйепле. Теге кеше аҡса талап итә.

- Аҡса? - тип ҡабатлап һораны Сара. -Күпме һорай?

- Илле мең...

- Илле мең? - Сараның тыны ҡыҫылды. - Шулай һөйләшәбеҙ, Ирек. Ебәрәм аҡсаны. Тик машинаны кире алып ҡайт. Бүтән ултырмайһың! Ишеттеңме!

- Әсәй асыуланма. Рәхмәт! Әсәй, алып ҡайтам.

Яңғыҙ бала, аҡса таптыра белә. "Лада"ны алып китер алдынан да, йүнәтергә кәрәк, тип аҡса алғайны. Хәҙер тағы өҫтәп ремонтлатырға кәрәк... Иркәйе Рауилын көйҙөрөргә ярамай. Белмәһен, белмәгәндең белеге тыныс. Эше ауыр уның. Буровойҙар, торбалар, гүмеркәйе шул тирәлә йөрөп үтә... Институт тамамлаған булһа ла, Рауилға һөнәре буйынса эшләргә яҙманы. Үҙе лә ауыр эшкә күнде, йылы урын эҙләп бәргеләнмәне. Рауилдың атаһы ла төҙөүсе ине бит. Шуға ла Рауил тураһында, бәләкәйҙән физик эшкә күнегеп үҫкән эшсе синыф балаһы, тип әйтергә генә ҡала. Сараның әсәһе шулай тип төрттөрөргә ярата. Күрәһең, әсәкәйе үҙенең ҡыҙын министр улына барыр, тип хыялланғандыр. Атаһы Айтуған ағай Рауил кейәүенән бик риза булды. Был Сара өсөн иң мөһиме, сөнки ул атаһының үҙен яратҡанын ихлас тойоп үҫте. Атай һәр саҡ эргәлә булды. Тик өс йыл элек ҡаты ауырып, фани донъянан үтте. Шул саҡта Сара өсөн тормоштоң нуры һүнгәндәй булғайны. Ә эште юғалтыу нимә инде? Сағыштырырлыҡ ҡазамы ни? Эш табылыр!

Япа-яңғыҙы өйҙә ултырғанда ла, тормош бит дауам итә. Яҡындары уны онотмай. Әсәһе Линиза апай иртәнсәк шылтыратып, Сараһының хәлен белешергә өлгөрҙө. "Ҡыҙым, эштән нисәләрҙә ҡайтырһың икән?" - тип һораны. "Бөгөн өйҙә генә эшләйем", - тип алдашты ҡыҙы. Линиза апай был хәбәргә ҡыуанып китте: "Улай булғас, барып сығырмын!" Тауышы көр үҙенең. "Нимә булды, әсәй?" "Йә, ярай, барғас, һөйләшербеҙ!" "Миңә кәрәк саҡта балам да өйҙә", - тип ҡыуаналыр әсәһе. Бисара ҡыҙының хәлен белмәй шул...

Ҡотолдо унан ҡурҡаҡ баш мөхәррир. Анһат юлын тапты... Сара тағы интернеттағы уйынға күсте. Баш мөхәррирҙән үс алғандай, ярһып-ярһып уйнаны. Виртуаль дошмандарҙы еңә барҙы, һәм үҙенең бер нисә "йән"гә эйә булыуынан кинәнес алды. Ваҡыт һиҙҙермәй үтә бирҙе. Была һуңғы алыш ҡалды, унан инде...

Ишек төймәһенә баҫтылар. Бүлмәлә зыңлау тауышы яңғыраны, ҡатын терт итеп ҡалды. Сара ишекте барып асты. "Аh" та "уh" итеп әсәһе Линиза апай килеп инде.

- Әйҙә, әсәй! Хәҙер сәй ҡуям, - тине Сара көр тауышлы булырға тырышып.

- Ярар, ҡуйырһың, ашыҡма, - әсәһе диванға барып лыпын ултыра төштө. - Бер кеше менән танышҡайным... - тине ул ағымлы тауыш менән.

Әсәһе һуңғы йылдарҙа табиптар менән танышырға ярата. Был юлы үҙенән ниндәй сир эҙләй икән?

- Нимәнән даулай?

- Яңғыҙлыҡтан!

- Нимә?

- Мин һиңә бер кеше менән таныштым, тинем. Бер буйҙаҡ ир менән.

Сара әсәһенә ҡараған килеш селт-селт күҙҙәрен йомдо. Линиза апайҙың әйткәне һаман башына барып етмәне. Әсәһе үҙенә ир эҙләй башлағанмы әллә? Булмаҫ!

- Кем ул буйҙаҡ? - тине Сара ҡоро тауыш менән.

- Ҡарасәле, һөмһөрө ҡойолдо. Әсәңде көнләмәйһеңдер? Ниңә, мин бит хәҙер япа-яңғыҙ.

- Әсәй, ниндәй бәндә һуң ул? - Сараның ҡашы төйөлдө, быны күргән Линиза апай ҙа һүҙҙе икенсе яҡҡараҡ борҙо:

- Таныштым. Интернет таныштырҙы. Хәҙер кеше менән тереләй аралашып буламы ни? Ана, һинең дә бит ноутбугың эшләп ултыра. Алдынан китмәйһең. Бәй, аҡайма миңә улай!

- Ҡасандан таныш?

- Төпсөнәһең бит, балаҡайым, ә! Зерә әйттем! Ярты йыл була инде.

- Күрешкәнегеҙ бармы?

- Юҡ, миңә күрешер өсөн үҙемде рәткә килтерергә кәрәк. Битте әҙерәк шымартып, эйәк тирәһен ҡараштырып...

- Әсәй!

- Бәй, алтмыш етелә тормош башлана ғына. Бөтәһен аңлап, төшөнөп, иң матур итеп йәшәү шул йәштә башлана. Ҡалай яман итеп ҡарайсы!..

- Юҡ, аптырайым ғына. Әсәйгә яман ҡарап була тиме ни инде? - Сара үҙен ҡулға алды, тыныс тауыш менән өндәште. - Әйҙә, сәй эсергә.

Өҫтәл янына килеп ултырғас, Сара һорамай булдыра алманы.

- Алтмыш етелә тормош башлана ғына икән, әсәй. Һм-м... Ә минең йәштәсе?

- Һеҙ әле хаталана-буталана торған йәштә. Әйтәм бит, минең йәшкә килеп еткәс, тормоштоң ҡәҙерен белерһең.

Сара ҡысҡырып көлөп ебәрҙе. Бына әле генә ул үҙе өсөн тормошо бөткән һымаҡ тойоп, төңөлөп ултыра ине. "Тә-ә-әк!" тине. Баҡтиһәң, әсәһе иҫәбе менән ул әле йәшәй ҙә башламаған! Бынан һуң үҙенә лә рәхәт булып китте. Ҡайһы саҡ мәғәнәһеҙ хәбәр ҙә кәйефте күтәрә икән, бигерәк тә үҙ әсәйеңдең ауыҙынан ысҡынһа. Линиза апай ҡыҙының яуап биргәнен дә көтмәй, үҙенең сумкаһын аҡтара башланы. Әсәһенең бындай ҡыланышына өйрәнеп бөткән Сара урынынан ҡыбырламаны ла. Бына әсәһе ниндәйҙер дарыуҙы йотоп ебәрҙе. Линиза апай шулай һәр ваҡыт етди һөйләшеүҙән ҡаса торғайны. Мотлаҡ рәүештә берәй дарыуға йәбешә, үҙенең сирләп киткәненә ышандыра. Һәр хәлдә, атаһы ҡатынының һаулығы насар икәненә ныҡ ышанып йәшәне. Иҫ белгәндән ул: "Линизам үлә инде", - тип ҡайғыра торғайны. Атай был донъяла юҡ, ә әсәй үҙе өсөн тормош башланыуы тураһында гәп һата... Сара әсәһенең валерьянка йотҡанын ғәмһеҙ генә ҡарап ултырҙы.

- Һин бөгөн әллә ҡалайһың, - тине Линиза апай.

Сара иренен ҡымтыны, эштән ҡыҫҡартылғанын белһә, хәл ҡатмарланасаҡ ҡына, ул саҡта, һис шикһеҙ, әсәһенә "Ашығыс ярҙам" машинаһы кәрәк буласаҡ. Сара үҙен мөләйем тоторға тырышты.

- Виртуаль шәп дуҫың барлығы менән аптыраттың дабаһа, - Сара һүҙҙе икенсегә борорға тырышты. - Илдар ағайым ни хәлдә?

Илдар тигән исемде ишетһә, әсәһе бар донъяһын онота. Линиза ханым өлкән балаһын бөтөнөһөнән дә өҫтөн күреп ярата. Илдар ағаһы Саранан биш йәшкә оло, тормошта үҙ урынын тапҡан, үҙен раҫлаған кешеләрҙең береһе - әлеге көндә Стәрлетамаҡта судья булып эшләй. Ә Шамун ауылында йәшәгән Ләлә һеңлеһе Саранан ете йәшкә кесе, шулай ҙа өс бала әсәһе булырға өлгөрҙө. Береһенән-береһе ваҡ балалы ғаиләгә, әлбиттә, ярҙам кәрәк. Иҫән генә булһындар бәләкәстәр. Бала яратҡан Рауилы балдыҙы менән бажаһына ихлас йорт һалышты. Хәйер, Сараның да хәстәрен тойоп йәшәйҙәр, һәр береһенең тыуған көнөнә ул аҡса, бүләк ебәреп кенә тора. Өфөнән ситтә торғастары, Линиза апай кесе ҡыҙына йыш йөрөмәй. Унан, ҡәрендәштең һеркәһе бик һыу күтәрмәй, Сара шикелле, әсәһенең мыжыуына күнеп, баш ҡағып ултыра, йә өндәшмәй генә үткәреп ебәрә торғандарҙан түгел. Шуға Линиза апай эше-мәшәҡәте килеп сыҡһа, туп-тура өлкән ҡыҙына, йәғни Сараға йүгерә.

Сара яңылышманы. Әсәһенең йөҙө яҡтырып китте. Ул тәмләп иренен ялап алды ла баш балаһын маҡтарға тотондо.

- Шундай ҙа хәстәрлекле кеше булыр инде был Илдар! Бөгөн иртәнсәк мине йоҡонан уятып, хәл белеште. Шылтыратып ҡына тора. Ә һин кисә телефоныңды ла алманың.

- Тауышын һүндергәйнем. Күрмәгәнмен. Ҡай саҡ теләһә кем шылтыратып йонсота бит. Виртуаль дуҫтарға ла ышаныс юҡ, әсәй.

Әсәһенең был темаға бүтән һөйләшкеһе килмәне шикелле.

- Әле һиңә килгәндә Риана юлыма осраны. Теге мәлдә лә урамда тап иткәйнем. Нимә, эшләмәйме әллә ул бер ерҙә лә?

- Әйтә алмайым, әсәй. Үҙе өндәшкәне юҡ.

- Йөҙөнә ҡарарһың әле, бөтөнләй һүнгән! Заманында һинең

*Эйе, башҡорт әҙәбиәте йомшарҙы хәҙер. Быны сәбәбе ойошмаға яҙыусы кимәленә етерлек үҫешмәгән, һәләте булмаған, әҙәбиәткә башкөллө хеҙмәт итергә теләмәгән кешеләрҙең йыйылып китеүендәләр.*



менән ҡалай ярыша торғайны. Вәт бит, ә! Әсәһе үлгәндән һуң, уны яҡлаған, ҡарауыллаған әҙәм ҡалманы шикелле. Класташың тип әйтерлек түгел, хәҙер ул һинән өлкәнерәк күренә, - тине Линиза апай ниндәйҙер бер ҡәнәғәтлек менән. - Ире күҙгә-башҡа салынғаны юҡ. Йөрөйҙөр ил ҡыҙырып. Барабанщик, тинеңме әле?

- Эйе, музыкант. Былай иренә зарланмай.

- Зарланып ҡайҙа барһын! Тәүгеһенең ҡәҙерен белмәгәс. Эскеләй ҙә шикелле. Юҡ, яманлап әйтмәйем, шуныһы насар, әсәһенең өмөтөн аҡламаны. Ә минең ҡыҙ, - Линиза Сараһына йылмайып ҡарап алды, - эштән бушағаны юҡ. Эшлә, эшлә, ваҡытыңды алмайым. Эйе, ҡай берәүҙәр ваҡыттарын заяға үткәрә. Минекеләр гел эш өҫтөндә!

Сара ирекһеҙҙән әйәк аҫтын ҡашып алды, яуап бирмәне. Ҡайтырға йыйынған Линиза апай, ишек төбөнә барып еткәс, туҡтаны.

- Әйткәндәй, Рауил кейәү ҡасан ҡайта?

- Әле генә йыйынмай. Унын ҡарауы, Ирек ҡайтырға тейеш, шылтыратты. Бөтәһе лә яҡшы, ялға ғына ҡайта...

Әсәһе сығып киткәс, өйҙә тынлыҡ баҫты. Сара буш мониторға ҡараған килеш уйға батты.

Риана, тигәндән. Эйе, Риана менән бер класта уҡыны улар. Уҡыу буйынса ла ярыша инеләр. Тик Риана һәр саҡ отличница булды. Унын әсәһе мәғариф министрлығында эшләне, класс етәксеһе менән дуҫтар инеләр. Риана, әсәһенең һәм класс етәксеһенең инаныуы буйынса, бөтөн фәндәрҙән тик бишкә өлгәшергә тейеш, һәм был уңышта уны берәү ҙә ҡыуып етергә тейеш түгел. Сараға уҡыу ауыр бирелмәне. Ул да бөтөн фәндәрҙән "бишле" алыр өсөн тырышты. Ләкин нисек кенә серәнмәһен, нисек кенә әҙерләнеп барып ҡул күтәреп ултырмаһын, класс еткәксеһе үҙ фәненән уға бер ҡасан да биш ҡуйғаны булманы. Ошо ғәҙелһеҙлектән күпме күҙ йәше түкте Сара. Линиза апай, уҡытыусың менән үҙем барып һөйләшәм, тигәс, ғәрсел Сара уны тыйҙы. "Юҡ, әсәй, Риана, бәлки, уҡыуҙа алдынғылыр, ләкин тормошта уны һәр саҡ ҡарауыллап, бәпләп торған әсәһе лә, уҡытыусыһы ла булмаҫ. Ә мин үҙ юлымды табасаҡмын", - тине. Риана шикелле алтын миҙалға бөтмәһә лә, үҙе теләгән факультетҡа уҡырға инде. Ҡыҙыл дипломға тамамланы. Ләкин ҡыҙыл диплом да һинең тормош юлың ал да гөл булыр тигәнде аңлатмай. Рианаға килгәндә, уны әсәһе мединститутҡа индерҙе, ә бит ҡыҙҙың бер ҙә унда уҡырға ингеһе килмәй ине. Юҡ, әсәһе күндерҙе. Риана өсөнсө курста уҡыған сағында бай кейәүгә барҙы. "Риана элиталы өйҙә йәшәй", тип класташ ҡыҙҙары бер булып һөйләгәйнеләр. Тик өс йылдан ире аварияла һәләк булып ҡуйҙы. Бейеме улының үлемендә Риананы ғәйепләне, аралары боҙолдо. Ул атай өйөнә кире ҡайтты, тик туғандары менән тынсыша алманы. Холоҡһоҙ шул ул... Шулай уҡ бер ҡайҙа ла оҙаҡ эшләй алманы. Дөрөҫөн әйткәндә, кешеләр менән һөйләшә белмәй ине ул. Мәктәптә уҡыған сағында кем менән булһа ла йыш ҡына әләгешеп китә торғайны. Ул йылдарҙа, әлбиттә, яҡлаусылары булды. Ә тормошҡа үҙаллы аяҡ баҫҡанда улар әллә ни ярҙам итә алмай ине шул. Әсәһе ауырып үлеп киткәс, туғандары фатир бүлешеп, үҙ-ара судлаша башланылар. Риана бер нәмәһеҙ тиерлек тороп ҡалды. Ҡасандыр элиталы йортонда көн күргән иркә ханым бер мәл Нияз исемле ябай бер музыкантҡа тормошҡа сыҡты. Нияздың да даими эшләгән урыны юҡ. Ниндәй ансамбль, ниндәй төркөм саҡыра, шунда барып барабан һуғып ултыра. Иң ҡыҙығы шунда, мәктәпте бөтөргәс, бүтән күрешмәбеҙ, тигән класташтар бер өйҙә тора башланылар. Бер подъезға тура килделәр хатта. Сара, аптырап, башын сайҡап ҡуйҙы. Бер йорт, хатта бер подъезд... Бына бит тормош. Баштараҡ Риана уны күрмәмеш була торғайны, һаулыҡ алыуҙы ла ғәрлек һананы. Аҡса кәрәк була башлағас, үҙе килеп өндәште. Хәҙер ҡәҙимге иҫәнләшеп йөрөйҙәр. Бер күрешкәндә Риананың һөйләп хәбәре бөтмәй. Икенсе ҡарағанда, теләр-теләмәҫ баш ҡағып үтеп китә, өсөнсөһөндә бөтөнләй күрмәмеш була. Унын был ҡылығына аптырамай Сара, өйрәнгән.

Телефоны шылтыраны. Сараның күҙҙәре маңлайына менде. Унын кем тураһында уйлағанын һиҙгән тиерһең, Риана шылтырата.

- Сәләм, дуҫҡай! Өй алдында Линиза апайҙы тап иткәйнем. Ул һине өйҙә, тине, - Риана Сараның яуап биреүен дә көтмәй, һүҙен дауам итте. - Дуҫҡай, онлайндан өс мең ебәр әле!

- Нимә?- тип ишетмәгәндәй ҡабатлап һораны Сара.

- Бурысҡа аҡса, - тип ҡабатланы Риана. - Нимәгә аптыраған булаһың? Был донъяла беҙҙе тулҡынландырған, борсоған, ярһытҡан, хисләндергән бер генә нәмә бар, ул - аҡса. Йөрәккә тәьҫир итер нәмә бары ул ғына. Был тормош фәлсәфәһе.

- Йөрәккә тәьҫир иткән нәмәләр күп булыр ул.

- Береһе лә мәңгелек түгел, аҡыллым. Хатта һине хыянатһыҙ яратҡан әсәй ҙә бер мәл мәңгелеккә ташлап китә. Унһыҙ йәшәй башлайһың. Ә аҡса һәр саҡ кәрәк.

"Был тағы һуҡмыш, ахырыһы..."

- Нишләп шылтыратып ятаһың? Төшөп алыр инең, ике ҡат аҫҡа төшөүе ауырмы? Әллә өйҙә түгелһеңме?

- Мин хәҙер!

Бер минут та үтмәне, Риана ишекте дөбөрләтергә кереште.

- Дуҫҡай! Яратам үҙеңде! - тип, атылып килеп, Сараны ҡосаҡлап алды. Эйе, Риана самаһыҙ кәйефле! Ҡайҙа байрам итергә өлгөрҙө икән?

- Мин оҙаҡҡа түгел, - Риана түшәмгә төртөп күрһәтте. - Мине Алина менән Әҙилә көтә. Ғәләмәт шәп байрам итеп ултырабыҙ. Алинаның тыуған көнө! Интернет аша миңә лә, уға ла кәттә туфли һайланыҡ. Ташлама менән бирәләр!

"Тыуған көн," имеш. Һеҙгә сәбәп кенә булһын!" - тип уйланы Сара.

- Алина бай түгелме ни? "Һин бер ай эшләгәнде, мин бер көндә эшләйем", - тигәйне ул миңә.

- Алкаш бит ул, - Риана хихылданы. - Тапҡанын эсергә тотона, аҡса ҡулында тормай.

Риана Сара тотторған берәр меңлектәрҙе баш осонда һелккесләп, көлә-көлә сығып китте. Бер аҙҙан унын тауышы подъезды яңғыратты.

- Ҡыҙҙар, аҡса булды! Киттек ресторанға!

**(Дауамы бар).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ЙӘНЕМ ТЕЛӘГӘНДЕ ЯҘАМ

**Белорет районында йәшәп ижад итеүсе Мәүлит Кәримовты үҙенсәлекле шиғриәте аша ла, журналист яҙмалары буйынса ла беләбеҙ. Быларҙан тыш ул "Ҡуңыр буға" әҙәби ойошмаһын етәкләй һәм тау-урманлы яҡтың ерлекле ижадын халыҡҡа күрһәтеүгә, әҙәбиәткә ғашиҡ, һәләтле йәштәрҙе үҫтереүгә лә бағышлаған ғүмерен.**



➔ **Һеҙ үҙ төбәгегеҙҙә "Ҡуңыр буға" әҙәби ойошмаһын әүҙем эшләтәһегеҙ. Интернет киңлектәренән генә күҙәтеп барғанда ла, ойошмала беҙ инде исемдәрен таныған ижадсылар ҙа байтаҡ ҡына. Был төбәктә шулай һәләтле кешеләр күпме?**

- Һәләтле, яҙышырға теләүселәр күп, әммә уларҙың барыһын да ижадҡа, беҙҙең ойошмаға йәлеп итеп булмай. Бөгөнгө йәшәйештә рухи аҙыҡ иң беренсе сиратта тормай, үкенескә ҡаршы. Күптәрҙе саҡырып-саҡырып та, шуларҙың аҙҙары ғына ойошмаға килеп инә, тиһәм, хата булмаҫ. Кемдеңдер ижадын интернетта күреп әйҙәләйһең, кемделер ойошма ағзалары алып килә. Күптәр үҙҙәре шиғыр-хикәйәләрен алдан миңә ебәреп, ижадтары менән таныштырырға тырыша... Әйткәндәй, шиғырҙарын интернет аша миңә ебәреүселәр бер беҙҙең төбәктән генә түгел, ә бөтә Башҡортостаныбыҙҙан бар. Бер-ике шиғырҙан алып, тотош китаплыҡ итеп тә һалалар. Йәлеп итеүгә килгәндә, һәләтле икәнен күреп, кемделер көс менән тигәндәй ойошма сараларында ҡатнаштыраһың, башҡа район, ауылдарға алып йөрөйһөң. "Ҡуңыр буға" ойошмаһынын ағзалары тик йәш, башлап яҙыусылар бит инде, күптәре уҡытыусылар. Сараларыбыҙҙа ҡатнашырға ҙур теләктәре булһа ла, уҡытыусылар эштәренән китә алмай.

Район кимәлендә, ауылда көн күргән хеҙмәтсән халыҡ менән әҙәби ойошманы йәшәтеп килеү, йәшәтеп кенә түгел, әүҙем эшләтеү еңел хеҙмәт түгел. Үрҙә әйткәнемсә, бөгөн яҙышыуҙы иң һуңғы рәткә ҡуя күптәр. Һәләте булғандар ҙа ижад итеүгә артыҡ етди ҡарамай. Һәм ижад кешеләре бит улар үтә лә нескә күңелле. Тормош ауырлығы, бер ҡырын ҡараш, бер ҡаты һүҙ уларҙың илһамын юҡҡа сығара ала. Бына ошоно аңлағандар һирәк. Был һүҙҙәрҙе нимәнән әйтәмме? 2014 йылдан алып беҙҙең ойошманың бер генә ағзаһын да Яҙыусылар берлегенә алманылар. Был турала күп яҙылды инде. Ә беҙҙә ағза булырлыҡтар етерлек. Әгәр "Ҡуңыр буға" әҙәби ойошмаһына ҡараш икенсерәк булһа, ул тағы ла әүҙемерәк эшләр ине.

➔ **Башҡорт әҙәбиәте йомшарҙы, бөгөн унын жанрын да, әҙәби нормаларын да тикшергән һәм баһалаған үҙәк тә, хеҙмәттәр ҙә, хатта айырым тәнҡитселәр ҙә юҡ, тигән фекер булды күптән түгел интернетта. Ошо хаҡта нимә әйтә алаһығыҙ?**

- Эйе, башҡорт әҙәбиәте йомшарҙы хәҙер. Быны сәбәбе ойошмаға яҙыусы кимәленә етерлек үҫешмәгән, һәләте булмаған, әҙәбиәткә башкөллө хеҙмәт итергә теләмәгән кешеләрҙең йыйылып китеүендәләр. Мин матур ижад иткән һәм уҡыусы яратып уҡыған яҙыусыларға тел тейгеҙмәйем. Һуңғы ваҡыттарҙағы ҡабул ителгән ағзаларҙың күбеһен таныу ғына түгел, ишетеп тә белмәйһең хатта. Кемдәр улар? Ә үҙем белгән, таныған ул яңы яҙыусыларҙың әҫәрҙәре ниндәй? Интернеттағы "Ҡуңыр буға" төркөмөндә мин был турала яҙҙым, исемдәрен дә әйттем. Ҡабатлап тормайым. Төрлө жанрҙа яҙған көслө ижадсыларыбыҙ бар, тик әҙҙәр. Улар ғына бөтә башҡорт әҙәбиәтен нығыта алмай хәҙер. Эҙемтә, һөҙөмтәләре бөгөн үк күренеп тора. Киләсәкте уйлаһаң, балалар, ейәндәр нимә уҡыр ҙа, кем булып үҫер? Интернетты мин бында бөтөнләй ғәйепләмәйем. Китап уҡыған, телен һөйгән кешегә бер нәмә лә ҡамасау түгел.

Ә бик аҙ булған тәнҡит мәҡәләләрен уҡыһаң, улар тик маҡтау формаһында яҙыла. Авторҙың, бер маҡталғас, мин шәп яҙам даһа, тип, ары эҙләнмәүе, үҙен үҫтерергә тырышмауы мөмкин. Әҙәби нормаларҙы, жанрҙы тикшергән, баһалаған материалдар ҙа юҡ кимәлендә. Журнал, гәзиттәге ҡайһы бер тәнҡит мәҡәләһен уҡыһаң, шундай уй тыуа, әйтерһең дә, автор яҡшы танышынан үҙе тураһында заказ менән яҙҙырған. Ошо миҫалдар килтерә лә инде әҙәбиәтебеҙҙең йомшарыуына... Шунлыҡтан интернетта әйтелгән фекер буш һүҙ түгел ул.

➔ **Һеҙҙең йәштә нимәләр хаҡында яҙыу зарур? Ә нимәләр тураһында яҙғы килә шулай ҙа?..**

- Әлбиттә, үҙеңдең тормош тәжрибәһенә, йәшәлгән ғүмер йылдарына ярашлы рәүештә тәрбиәүи темаға яҙыу кәрәктер. Тик улай ғына итһәң, үҙеңә оҡшаған башҡа нәмәләр яҙылмай ҡалһынмы? Мин инде йәш кеше түгел, тип кенә ижадҡа ҡарашымды ла, ижад итергә теләгән темаларымды ла үҙгәртә алмайым. Улай булһа, мин яһалма әйберҙәр яҙырға тейеш булам. Миңә көндәлек тормош, ғаилә, мөхәббәт тураһында яҙыу оҡшай. Ир менән ҡатын араһында саф һөйөү генә түгел, хыянаты ла бар... Сатира һәм юмор ҙа яратам, ижад итәм. Ә бына ысын булмаған фантастиканы яҙыу түгел, уҡырға ла яратмайым. Матур, уҡымлы, уҡыусыңды ялҡытырлыҡ булмаған әҫәр үҙе үк тәрбиә биреүсе сығанаҡ түгелме ни? Бер һүҙ менән әйткәндә, мин йәнем телəгәнде яҙам.

Ғөмүмән, әҙәбиәтте һөнәр итеп һайларға кәрәкмәй. Әгәр шулай итһәң, әҙәбиәттән тик файҙа ғына алырға теләһәң, әҫәрең уҡыусың өсөн түгел, ә үҙең өсөн генә ижад ителгән тиергә була. Һөҙөмтәлә, юғарыла әйтелгәнсә, әҙәбиәт йомшара. Әҙәбиәт үҙе һине күптәр араһынан һайлап алып, һин уға йәнең, тәнең менән бирелергә тейешһең!

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА**
**яҙып алды.**

✓ *Үпкәләрҙе нығытам тиһәгеҙ, шулай уҡ йырлағыҙ. Йырлағанда дөрөҫ итеп тын ала башлаясаҡһығыҙ, тимәк, яҡшыраҡ йүкласаҡһығыҙ ҙа. Иммунитетты нисек нығытырға белмәһәгеҙ, йырлағыҙ, тип кәңәш итәбеҙ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ЯЙЛАП АШАҺАҢ...

■ Артыҡ ауырлыҡ йыймайым, тиһәң, ризыҡты яйлап аша, ти Япония ғалимдары. Тикшеренеүҙәр дүрт мең кешелә үткәрелгән, уларҙың ҡайһылары тиҙ, мәҫәлән, төшкө ашты 5 минут эсендә ашауҙы ғәҙәт иткән. Белгестәр уларҙың тән ауырлығын 20 йыл буйғаны менән дә сағыштырған. Кем тиҙ ашай, уларҙың ауырлығы күпкә артығыраҡ булған. Яй ашаусыларҙың тән ауырлығы артыҡ үҙгәрмәй. Әлбиттә, был һөҙөмтәләргә башҡа ғәҙәттәр - физик күнегеүҙәр эшләү, тәмәке тартыу, спиртлы эсемлектәр ҡулланыу ҙа тәьҫир итә.

■ Йырлау - яҡшы кәйеф һәм шатлыҡ билдәһе булараҡ ҡабул ителә. Әммә бар кеше лә ҡысҡырып йырларға ҡыймай. Ғалимдар әйтеүенсә, йырлауҙың файҙаһы бик ҙур. Был ваҡытта эндорфин - "бәхет гормоны" бүленеп сыға. Шулай уҡ ҡысҡырып бер йырлаһаң, стресс булдырмай торған гормон - окситоцин бүленә. Ул кешене тыныстандыра, депрессияны еңергә ярҙам итә. Йырлаған саҡта йөрәк ритмы яҡшыра, хатта ҡорһаҡ һәм диафрагма мускулдарын нығыта. Кем көҙгө алдына тороп, үҙен сәхнәләмен, тип хис итеп йырлай, улар икеләтә ота, ти белгестәр. Был оялсанлыҡты еңергә ярҙам итә. Үпкәләрҙе нығытам тиһәгеҙ, шулай уҡ йырлағыҙ. Йырлағанда дөрөҫ итеп тын ала башлаясаҡһығыҙ, тимәк, яҡшыраҡ йүкласаҡһығыҙ ҙа. Иммунитетты нисек нығытырға белмәһәгеҙ, йырлағыҙ, тип кәңәш итәбеҙ. Йырлаған мәлдә А-иммуноглобулины кимәле күтәрелә, тип раҫлай инглиз ғалимдары. Шуға ла витаминдарға бай емеш-еләкте йырлай-йырлай ашағыҙ. Йырлау баш мейеһен үҫтерә, хәтерҙе нығыта.

■ Ғалимдар мәктәп парталарын бейек өҫтәлдәргә алыштырырға тәҡдим итә. Бындай өҫтәл артында балалар ултыра ла, баҫып тора ла аласаҡ. Техастағы A&M университетының Сәләмәтлек ғилми үҙәге белгестәре тикшереүҙәр үткәргән. Уҡыу йылы дауамында балаларҙың һорауҙарға яуап биреүе, дискуссияларҙа әүҙем ҡатнашыуы баһаланған. Һөҙөмтәлә, баҫып торған саҡта баланың иғтибары 12 процентҡа юғарыраҡ булыуы асыҡланған. Яңыраҡ ғалимдар дәрестә баҫып тороуҙың артыҡ ауырлыҡтан ҡотҡарыуы тураһында белдергәйне. Шуға ла белгестәрҙең был яңылығы бер кемде лә аптырауға һалмаған. Физик әүҙемлектең саҡ ҡына күтәрелеүе лә когнитив һәләттәргә ыңғай йоғонто яһай, тип белдерә ғалимдар.

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуын билдәләгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәлер лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Йөрәкте сирҙәрҙән һаҡлау өсөн көн дауамында бер нисә тапҡыр яратҡан көйөңдө тыңлау ҙа етә. Мэриленд штаты Университеты кардиологтары үткәргән һынауҙа ҡатнашҡан кешеләр ике аҙна дауамында бер нindәй ҙә көй тыңламай. Яратҡан композицияларын ишетеү менән уларҙың барыһының да артериялары тәүге күрһәткестәргә ҡарағанда 26 процентҡа киңәйгән булыуы асыҡлана.

ТАБИП КӘҢӘШЕ

# КОРОНАВИРУСТАН ТҮГЕЛ...

## уның эҙемтәләренән вафат булалар

**Зубоволағы инфекцион үҙәк, йәғни ковид-госпиталь табибы Глеб ГЛЕБОВ "Эхо Москвы в Уфе" радиостанцияһы эфирында коронавирустың беренсе билдәләре ваҡытында нindәй препараттар ҡулланырға кәрәклеге, нindәйҙәрен ҡулланыу ярамағанлығы хаҡында һөйләне. Шулай уҡ ул COVID-19 вирусын профилактикалауға иғтибар йүнәлтте, халыҡтың 85 процентының был инфекцияны йоҡторасағын һәм пациенттарҙың ковидтан түгел, ә уның эҙемтәләренән, йәғни сир һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән икенсе сирҙәрҙең ҡиҫкенләшеүенән вафат булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.**




### Антибиотиктар

Дауалау ысулдары даими рәүештә үҙгәреп тора. Шуға күрә табип граждандарҙы, бигерәк тә сир башланып ҡына торғанда, антибиотиктар ҡулланмаҫҡа саҡыра. "Бактериаль пневмония булмағанда, антибиотиктар һеҙгә зыян ғына килтерәсәк. Эйе, тәүге ковид башланып ҡына торған осорҙа беҙ барыһына ла антибиотиктар ҡуйҙыҡ. Әммә хәҙер ҡайһы бер препараттарҙың һөҙөмтәһе булмауы тураһында беләбеҙ. - Әлбиттә, ысулдар үҙгәрә. Хәҙер беҙ нindәйҙер кимәлдә ковидты дауаларға өйрәндек", - ти табип.

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

Ашҡаҙан аҫты биҙенә иғтибар әҙ бүленә. Моғайын, коронавирус иң зыян килтергән ағза - ул ашҡаҙан аҫты биҙелер. Ҡатмарландырыусы фактор булып шәкәр сире тора. Коронавирус ашҡаҙан аҫты биҙен зарарлай, һөҙөмтәлә ҡанда шәкәр кимәле арта - был беренсе мәл. Икенсеһе - иммунитет ҡуҙәнәктәре организм ҡуҙәнәктәрен айырып тормай үлтерә, был "проект" тормошҡа ашһын өсөн ҡандағы глюкоза кимәле күтәрелергә тейеш. Шуға күрә ашҡаҙан аҫты биҙен "тынысландырырға", уның эшмәкәрлеген яйларға кәрәк. "Ә беҙ беренсе көндән уҡ антибиотиктар, вирусҡа ҡаршы көслө препараттар менән тултырып, уны ултыртабыҙ. Мин патологоанатомдар менән һөйләштем, мәйетте ярғанда улар сирҙе ауыр үткәреп һәләк булыусыларҙың ашҡаҙан аҫты биҙе ныҡ зыянлағанын белдерә. Был тема әлегә өйрәнелмәгән, уны әүҙем өйрәнергә кәрәк. Медицинала төп ҡағиҙә - зыян итмә, беҙ уны тоторға тейеш", - ти табип.

### Вирус йоҡтормаҫ өсөн нимә эшләргә?

- Үҙенең D витамины кимәлен контролдә тоторға тейеш (ғалимдар D витамины түбәнәйгән кешеләрҙең сирләүе һәм сирҙе ауыр үткәреүе тураһында белдерә. Уның кимәлен белер өсөн анализдар тапшырырға кәрәк).
- Битлектә йөрөргә.
- Социаль дистанция һаҡларға (битлектәр ҙә һәр саҡ һаҡламай, әгәр кеше ҡуҙлек киймәй икән, уның күҙе һаҡланмай, кемдер эргәлә сөскөрһә, битлек ярҙам итмәйәсәк).

### Нисек асыҡларға?

Үҙегеҙҙе насар тойһағыҙ, беренсе биш тәүлектә ПЦР тапшырырға кәрәк, әммә уларҙың 30 проценты ялған-кире һөҙөмтә күрһәтеүе ихтималлығын да онотторға ярамай. Тағы бер мәл: анализды бик йыш дөрөҫ алмайҙар. "Нисек мазок алғанды үҙегеҙ контролләргә тейешһегеҙ. Уның беренһен танауҙан, ҡуҙҙән йәш сығырлыҡ тәрәнлектә; икенсеһен йотҡолоҡтоң арҡты өлөшөнән алырға кәрәк", - ти Глеб Глебов.

Ҡапыл ғына тәм дә, еҫ тә тоймай башлаһағыҙ - 95 процент осраҡта был ковид.

Дауаланыуға килгәндә, әгәр кире күрһәтмә булмағанда, ҡанды шыйыҡлатыусы антикоагулянттар, вирусҡа ҡаршы һәм ҡаҡырыҡты сығарыусы дарыуҙар ҡулланыу кәрәк.

Эсегеҙҙә йоҡларға тырышығыҙ. Был торошта сатурацияның яҡшыраҡ булыуы раҫланған.

Хатта ПЦР кире булып та, кеше үҙен насар тоя икән, етенсе тәүлектә ҡан тапшырырға мөмкин. IgM иммуноглобулины табылһа, тимәк, ауырыйһығыҙ.

### Компьютер томографияһы

Тынығыҙ ҡыҫылмаһа, тын ала алмау тойғоһо булмаһа, КТ үтергә ашыҡмағыҙ, КТ - ул нурланыу. Үпкәләр 5-7-се тәүлектә генә зыянлана башлай. Әгәр КТ-ны алдан эшләтһәгеҙ ҙә ул бер нәмә лә күрһәтмәйәсәк.

### Температура

Күптәр температура юғары килеш торһа һәм төшмәһә, был үпкәләрҙең елһенеүен раҫлай, тип уйлай. Әммә тоноҡ быяла (матовое стекло) тәрәндәге вируслы пневмония булғанда бер нindәй елһенеү ҙә күҙәтелмәй. Температура цитокин штормы һөҙөмтәһендә күтәрелә. Әгәр ул 38,5 градустан юғары булып, парацетамол эскәндә лә төшмәһә, был дауаханаға ятырға кәрәклектең бер күрһәткесе.

### Ҡасан госпитализацияларға?

Бында дүрт пунктты күҙәтергә кәрәк:
- сатурация 95 проценттан түбән (пульсоксиметр менән үлсәнә);
- температура 38 градустан юғары;
- үпкәләр 25 процентҡа зыянланған;
- тыныс торғанда тын алыу минутына 22-нән күберәк.

"Әгәр ошо дүрт пункттың икеһе бар икән, һеҙҙе госпитализацияларға тейештәр", - тип белдерә табип-инфекционист.

Әгәр дауаханаға һалмайҙар икән, БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының 8(347) 286-58-27, 8 (347) 279-91-20 (күп каналлы, тәүлек әйләнәһенә) коронавирус буйынса ҡыҙыу бәйләнешенә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

### Табип-инфекционистың башҡа ҡыҙыҡлы фекерҙәре:

● Ковидтан дарыу юҡ, дауалау, күп осраҡта, билдәләр буйынса башҡарыла, рекомендациялар даими рәүештә үҙгәреп тора.

● Коронавирусты ОРВИ менән бутауы еңел. Башланғыс стадияла улар оҡшаш. Айырма шунда: ковид булғанда тәм һәм еҫ тойоу юғала.

● Коронавирустан ҡурҡырға ярамай, унан һаҡланырға кәрәк. Нормаль тормош рәүеше алып барған сәләмәт кешеләрҙең 85 проценты уны ОРВИ кеүек кенә үткәрәсәк.

● Коронавирус үткәргәндән һуң кеше 11-се тәүлеккә йоғошло булыуҙан туҡтай. Һауыҡыу осоронда температура, ҡоро йүтәл күҙәтелеүе мөмкин.

● Үпкәләрҙең зарарланыуы - коронавирус ваҡытында иң ҡурҡынысы түгел. Барлыҡ ағзалар һәм туҡымалар ҙа зарарлана, ҡан тамырҙары ла, шулай уҡ тромбтар барлыҡҡа килә һ.б.

● Коронавирустан түгел, уның эҙемтәләренән, ул организмда тыуҙырған патологияларҙан вафат булалар. "Кемдер обструктив бронхит, кемдер шәкәр сире менән ауырыған, кемдеңдер тромбтар барлыҡҡа килгән. Ковидтан шунса кеше үлде, тигән статистиканы ҡарап, унан нисек үлергә мөмкин икәнен аңламайым. Эйе, эҙемтәләренән үлергә мөмкин, ә ковидтан - вирусты һауаны һулап үлгән кешене күргәнем юҡ", - тип һығымта яһай Глеб Глебов.

*ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫ*

**Ноябрҙә Рәсәйҙең Ҡоштарҙы һаҡлау союзы тәҡдиме менән илебеҙҙә Ҡарабаш турғай көнө билдәләнде. Тап ошо көндә боронғо славяндар йорт-ҡура тирәһенә ҡарабаш, ҡыҙылтүш, шыршы һәм ҡарағай, үрмәлсек, көйәҙ, суҡ турғайҙар осоп килеүен билдәләп, уларҙы ем менән һыйларға кәрәк, тип һанағандар.**

# ҠОШТАРҒА ЯРҘАМ ИТ!



Киң таралған, төрлө урмандарҙа йәшәгән ҡарабаш турғайҙарҙы "Урман санитарҙары" тип йөрөтәләр. Улар урмандарҙы ҡоротҡос бөжәктәрҙән таҙартып, тәбиғәткә ҙур файҙа килтерә. Әгәр ҙә өй эргәһендә кешеләр эшләгән ояларға урынлашһалар, турғайҙарҙың бер пары ғына ҡырҡ төп емеш ағасын зарарлы бөжәктәрҙән таҙарта.

Һалҡын ҡыш көндәрендә ҡоштар аҙыҡ етешмәүҙән ныҡ яфалана. Шуға ла тағараҡтар элеп, уларға өҫтәмә туҡланыу урындары булдырыу кәрәк. Әммә аҙыҡты дөрөҫ һайлау мөһим. Ҡыҙҙырылған көнбағыш, майҙа бешкән һәр төрлө ҡамыр аҙыҡтары, тоҙло сәтләүектәр һәм сало, чипсы, тары ярмаһы (ул асыҡ һауала тиҙ окисләнә), печенье, ҡара икмәк, шулай уҡ яңы бешерелгән аҡ икмәк тә ҡанатлы дуҫтарыбыҙ өсөн зыянлы. Көнбағыштың ҡыҙҙырылмағаны һәм тоҙһоҙ, ваҡланған ашҡабаҡ орлоҡтары, бойҙай, тоҙһоҙ бешерелгән ҡарабойҙай, бешкән йомортҡа валсыҡтары һәм унының ҡабығы, хайуан майҙары, алма киҫәктәре улар өсөн бик файҙалы буласаҡ. Шуны иҫегеҙҙә тотоу мөһим: бер башлағанһығыҙ икән, ҡанатлы дуҫтарығыҙҙы көн дә ашатыу кәрәк. Улар ҙа рәхәткә тиҙ өйрәнеүсән, шуға тағараҡҡа аҙыҡты артыҡ күп һалыу дөрөҫ булмаясаҡ - ҡоштар үҙҙәре лә ашарҙарына табырға тейеш.

Халыҡ һынамыштарына ҡарағанда, ҡоштар күпләп йорт тирәләй йыйылһа, был тиҙҙән әсе һыуыҡтар башланыуға ишара. Ҡарабаш турғайҙар иһә һыҙғырһа - көн аяҙ, сипылдаһа - төндә әсе һыуыҡ, тағараҡ янында күпләп йыйылһалар - бурандар һәм ҡар яуыуы көтөлә.

**Әйткәндәй, Ҡарабаш турғай, турғай һымаҡтар отрядына ҡараған ҡышлаусы ҡош. Бөтә турғайҙар араһында иң сос, иң етеҙе ҡарабаш турғай һанала. Башында ҡара кәпәс, түше һәм ҡәүҙәһенең аҫты һары, түшенән ҡорһағы аша ҡойроҡ аҫтына үткән һыҙыҡ - ҡара. Аҡ сикәле, ҡанаттары һәм ҡойроғо һорголт күк, арҡаһы йәшкелт - һоро төҫтә. Тырнаҡтары кәкре, суҡышы осло, күҙе үткер. Осло суҡышы менән ағас ярыҡтарынан бөжәктәрҙе суҡып тартып сығара. Күбеһенсә ағас ҡыуыштарында оялай. Инә ҡош ҡыҙыл төрткөлө 9-13 бөртөк аҡ йомортҡа һала һәм баҫып сығара. Ә ата ҡош был ваҡытта аҙыҡ ташый. Яңғырауыҡлы тауыштары менән күңелле һыҙғырып һайрайҙар: "си-писи-пи-си-пи-ин-сә-ин-сә".**

**Илүзә ҒӘБИҘУЛЛИНА,**
**"Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт биосфера ҡурсаулығы хеҙмәткәре.**

*МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ*

# ФӘҺЕМЛЕ ЯҘМЫШТАР

## Шөкөр итәйек

Сүриәлә булған был хәлде абруйлы ғалим, шәйех Хәсән Хабанаҡа әл-Майҙани әш-Шәфии (1908-1978) һөйләп ҡалдыра: "Рамаҙан айының бер көнөндә ҡояш байырға бер сәғәт самаһы ҡалғас, өйгә ҡайтырға сыҡтым. Шунда мине бер фәҡир генә әҙәм туҡтатты. Мәсеттәме, өйөмдәме, дәрес биргән сағымда ул да килә торғайны. Унын шундай ныҡ ихлас итеп сәләм биреүенән минең хатта күңелем нескәрең китте. Ул шулай тине: "Аллаһы Тәғәлә хаҡына үтенәм, әйҙә, бөгөн ифтарға минең өйөмә, беҙҙең ризыҡтан ауыҙ ит!"

Туҡһынланып мөрәжәғәт итеүенән хатта телһеҙ ҡалдым, мине ҡунаҡ иткеһе килеүен күҙҙәренән күреп, Аллаһы Тәғәлә исеменән ялбарыуын ишетеп, йөрәгем йомшарҙы. Шунан: "Эй, ҡәрҙәшем! Мине бит өйҙә үҙемдең ғаиләм көтә, шулай булғас, бер ҡайҙа ла бара алмайым", - тинем. Шулай ҙа был кешенең ҡай тирәлә торғанын да, ифтарға ауыҙ асырға ризығы бармы-юҡмы икәнен барлығын белмәһәм дә, үтенесенән баш тарта алмаҫымды аңланым.

Бына унының өйөнә килеп еттек. Ишеге алды бәләкәй генә, өйҙә бер ял бүлмәһе һәм аш бүлмәһе генә бар. Ошо өйҙө бер танышынан һатып алған икән. Ишеккә алып килгән баҫҡыс йоҡа ғына, ике кеше баҫһа, һынып төшеп китерлек. Баҫҡан һайын таҡталары меҫкенлектән, фәҡирлектән ярҙам һорап ыңғырашҡандай.

Хужа иһә бәхет менән тулышҡан, ул туҡтауһыҙ рәхмәт яуҙыра һәм шөкөр итә. Ул миңә: "Әфәндем, был өйҙөң хужаһы - мин. Ә бөтөн хакимлыҡ - Аллаһы Тәғәләлә, минең был донъяла берәүгә лә бурысым юҡ. Әфәндем, бына күрәһегеҙме, иртәнсәк минең бүлмәмә ҡояш яҡтырта, ә икенсе яҡ тәҙрә ягынан байый. Бында таң алдынан Ҡөрьән уҡыйым, ҡатыным иһә, Аллаһы Тәғәлә унан риза булһын, теге тәҙрә эргәһендә ултыра һәм минең өсөн доға ҡыла. Аллаһ менән ант итәм, мин үҙемде Йәннәттә йәшәгәндәй тоям".

Шәйех артабан дауам итә: "Мин ул һөйләгәнде тынлайтынлай, баҫҡыс емерелеп төшөп китмәһен, тип ҡурҡа-ҡурҡа күтәреләм. Һәм бына, ниһайәт, ул әйткән бүлмәгә килеп индек. Мин барып ултырғас, хужа үҙенең ҡатыны янына аш бүлмәһенә йүнәлде. Иләп кенә улар һөйләшкәнен тыңлайым: "Ифтарға берәй нәмә әҙерлә. Шәйех беҙҙең менән ауыҙ асасаҡ". Ҡатындың: "Аллаһ исеме менән ант итәм, беҙҙә фулдән (ғәрәптәрҙең бешерелгән бобтан әҙерләнгән ризығы) бүтән бер нәмә лә юҡ. Ахшам намаҙына әле ярты сәғәт бар, тик беҙҙең бешерер нәмәбеҙ ҙә юҡ, булған хәлдә лә өлгөрмәйбеҙ..."- тигән тауышы ла ҡолаҡҡа салынды.

Һөйләшеүҙе ишетеп ултырғас, хужа кире әйләнеп килеүгә шулай тинем: "Эй, ҡәрҙәшем! Минең бер шартым бар. Ахшам намаҙына саҡырған аҙан яңғырағас, мин үҙем менән алған һыу һәм хөрмә менән ауыҙ асырға тейешмен. Аҙандан һуң ярты сәғәт үткәс, ашҡаҙаным һыуҙы, хөрмәне эшкәрткәс кенә, намаҙ уҡыйым һәм үҙемдең көндөҙгө вирдты тамам итәм. Шунан аҙаҡ фул һәм картуфтан башҡа бер нәмә лә ауыҙыма ҡапмаясаҡмын",- тинем. Хужа: "Ярай, һиненсә булһын, эй, шәйех!" - тине. Шунан мин хужаға: "Килештек, улай булғас, мин хәҙер Аллаһы Тәғәлә ҡашында яңғыҙым ғына ҡалайым", - тинем".

Бөтәһе лә шәйех уйлағанса килеп сыға, ул фәҡир хужа өйөндә ауыҙ асып ҡайтып китә. "Мин картуф ашайым тинем, - тип һөйләй шәйех, - сөнки ул ярлыларҙың ризығы, шуға ла хужалығында картуф барлығына шик тотманым. Унын өйөнән үҙемдә шат һәм бәхетле тойоп сыҡтым, сөнки Аллаһы Тәғәлә бүләк иткән өйө өсөн, үҙе һоҡланған гүзәл тормошо өсөн күңеленән бары тик Аллаһы Тәғәләгә маҡтау урғылған, мәрхәмәте өсөн Уны данлаған кешенең ауыҙы менән донъяны яраттым".

Артабан шәйех шулай тип дауам итә: "Бер нисә көндән бер төркөм ғәли заттар менән бергә мине лә бер бай саҙағарҙың йортона ифтарға саҡырҙылар. Йорт хужаһы Аллаһы Тәғәлә рәхмәте арҡаһында байлыҡҡа, дәрәжәгә, балаларға һәм затлы нәҫелгә эйә кешеләрҙең береһе ине. Табын яңы ғына тәҙәлгән зиннәтле ферманы күрһәтеү өсөн эшләнгәйне. Ихатала бөтәһе лә иҫ киткес матур, бөхтә, йорт мәшһүр замокты хәтерләтә, бассейны бына тигән, шәп ат һарайы бар. Аттары ла шулай уҡ затлы тоҡомдан. Беҙ ифтар ашаныҡ. Унан инде ҡунаҡтар таралыша башланы. Мин бер үҙем тороп ҡалғас, хужа тормошоноң ҡыҫынҡылығына, сауҙа эшенең бөтмәҫ мәшәҡәтенә, балаларының, бисәһенең насар холҡона, кешеләрҙең мәкерлегенә һәм уларҙың өнөн тығыр өсөн күп сығымдар эшләүенә зарлана башланы. Ул донъянан ерәнгән һымаҡ ҡыланды, хатта бөтөн ыҙа-яфаларҙан ҡотолор өсөн үлгеһе килгәндәй тойолдо".

Шәйех шулай тип дауам итә: "Аллаһ исеме менән ант итәм. Өй ишегенән машина ишегенә тиклемге арала ул минең күҙ алдымда бөтөн донъяны ҡараланы, минең күкрәгем ҡыҫылды һәм тын ала алмай башланым. Риза була белгән кешегә биргән яҡшылығы өсөн Аллаһы Тәғәләгә мең шөкөр!"

Бәхет беҙ түләй алған хаҡ менән баһаланмай, ләкин бәхет - Аллаһы Тәғәлә менән хәйерле бәйләнеш һәм Әр-Рахман, Әр-Рахим биргәндәр менән ҡәнәғәт булыу! Был тарихты шәйех Али әс-Сәләби еткерә.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**48-се идея**
**Хәтерһеҙлек гонаһы**

Маргарет Сангтерҙың "Хәтерһеҙлек гонаһы" тип аталған матур бер шиғыры бар.

*...Ибо жизнь так быстротечна,*
*а печаль так велика -*
*Грешно медлить с состраданьем*
*до последнего звонка.*
*Нас не сделанное мучит,*
*нам забытое больней.*
*Оттого ли ноет сердце*
*на исходе наших дней?*

Ни өсөн бөгөн һин кемдеңдер тормошон матурлай алмайһың? Әгәр бик тиҙҙән был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырһаң, үкенеүҙән йөрәгең әрнейәсәк бит. Бәлки, был ата-әсәйең, балаң йәки яратҡан кешең менән уртаҡлашырға теләгән һөйөүҙер, йәки бик төпкә киткән ыҙғыш-талашты туҡтатырға теләүҙер.

Ғүмер бик ҡыҫҡа. Был көндө һин үҙ мөмкинлегеңде ҡулдан ысҡындырмау өсөн файҙалан. Быны бөгөн эшлә. Әйтеп бөтөлмәгән һөйөүеңде аңлат, кисерелмәгән хатаңды ғәфү ит, күптән үтергә тейешле иреш-талашҡа нөктә ҡуй. Был көн ваҡыт тарафынан килтерелгән зыянды төҙәтеү, шатлыҡ һәм һөйөүҙе арттырыу хаҡына нимәләр эшләү өсөн кәрәк буласаҡ. Хәтерһеҙлек гонаһын ең. Иманың камил, был һинең ғүмереңде күпкә бәхетлерәк яһаясаҡ.

* * *

Был тауышмы, әллә яңғыраумы? Кешенең танып белеүе үҫеү, ғәжәйеп әйберҙәр уйлап сығарыуы менән бергә беҙ тутыйғошҡа, ниндәйҙер сит фекер яңғырашына әүерләбеҙ һымаҡ тойола.

Көндәлек гәзит биттәренән, кинотеатр һәм телевизор экрандарынан, китаптарҙан һәм плакаттарҙан беҙгә башҡа кешеләрҙең "беҙ уйларға тейешле, тип өндәүсе, беҙгә нисек йәшәргә һәм нимәгә ышанырға тип өйрәтеүсе" тауыштары ишетелә. Мин - шундай кешеләрҙең береһе. Мин, ошонда ултырып, үҙ идеяларымды һеҙҙең менән уртаҡлашырға маташам. "Минең фекерләү рәүешемде һеҙҙең үҙ фекерләү рәүешегеҙ итеп ҡабул итеү ҡурҡынысы бар бит", тип уйлайым да, шул уҡ ваҡытта һеҙҙе үҙем уйлағанса уйлатырға маташмауымды ла аңлайым. Ысынында иһә, мин һеҙҙе уйландырырға маташам. Мин тәҡдим иткән идеяларҙы алығыҙ ҙа, уларҙың йөгонтоһон үҙ тәжрибәгеҙҙә тикшереп ҡарағыҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 23 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.50, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Доктор Преображенский". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Грозный". [16+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 16.00, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.00 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Т/с "Партнёры по преступлению". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Необычная история в обычной деревне". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 НОЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.50, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Доктор Преображенский". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Я медленно сходил с ума". К 140-летию Александра Блока. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Грозный". [16+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00, 22.00 "Уфимская волна-2020". Финал музыкального конкурса радио "Спутник ФМ".**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Т/с "Партнёры по преступлению". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**5.00 "Наука 102". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 25 НОЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.50, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Доктор Преображенский". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Прости меня за любовь". К 95-летию Нонны Мордюковой. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Грозный". [16+]
23.30 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Министерство правды.**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.**
**22.00, 5.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Этно-краса. Дневник "Мисс International - Ufa-2020". [12+]**
**23.15 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.15 Т/с "Партнёры по преступлению". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Не женщина - дракон". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 26 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50 Модный приговор. [6+]
12.10, 1.15 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.50, 3.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Доктор Преображенский". [16+]
22.30 Большая игра. [16+]
23.35 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Я без тебя пропаду". К юбилею Нины Гребешковой. [12+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Грозный". [16+]
23.40 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
2.20 Т/с "Каменская-3". [16+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 Счастливый час.**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Бәхетнамә.**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 "Времечко".**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Т/с "Крик совы". [16+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "На том и на этом свете". [12+]**
**4.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**4.45 "Млечный путь". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 27 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.40 Жить здорово! [16+]
10.50, 3.00 Модный приговор. [6+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.10 Премьера. "Гражданская оборона". [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 3.50 Давай поженимся! [16+]
16.00, 4.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.45 Вечерний Ургант. [16+]
0.40 Д/ф Премьера. "Юл Бриннер, великолепный". [12+]
1.35 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
9.30 "Доброе утро, республика!"
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Т/с "Морозова". [12+]
17.15 Прямой эфир. [16+]
21.20 Аншлаг и Компания. [16+]
0.50 Х/ф "Валькины несчастья". [12+]
4.05 Т/с "Версия". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм, Республика! [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.)**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Т/с "Крик совы". [16+]**
**2.15 Спектакль "Семь девушек". [12+]**
**4.15 Бирешмә. Профи. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Бай". [12+]**

## 28 НОЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "101 вопрос взрослому". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Премьера. "На дачу!" с Наташей Барбье. [6+]
15.15 Угадай мелодию. [12+]
16.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.45 "Ледниковый период". Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
21.20 Сегодня вечером. [16+]
23.00 Х/ф Премьера. "Красавчик со стажем". [16+]
0.45 Х/ф "Лучше дома места нет". [16+]
2.25 Модный приговор. [6+]
3.15 Давай поженимся! [16+]
3.55 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.25 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.30 Доктор Мясников. [12+]
13.30 Х/ф "Ночь после выпуска". [16+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Самый лучший муж". [12+]
1.05 Х/ф "Когда наступит рассвет". [12+]
4.18 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 "Байтус". [6+]**
**11.30 Созвездие талантов. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30, 4.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - СКА (Санкт-Петербург). КХЛ.**
**19.30 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Т/с "Крик совы". [16+]**
**2.30 Спектакль "Эх, друг Байтимер..." [12+]**
**4.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**5.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**6.00 "Наука 102". [12+]**

## 29 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Не может быть!" [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/ф "Без антракта". К юбилею Геннадия Хазанова. [16+]
16.35 "Точь-в-точь". К юбилею Геннадия Хазанова. [16+]
19.20 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 "Что? Где? Когда?" Специальный выпуск к 45-летию программы. [16+]
23.10 Т/с "Метод-2" [18+]
0.05 Д/с "Самые. Самые. Самые". [18+]
1.50 Модный приговор. [6+]
2.40 Давай поженимся! [16+]
3.20 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

4.20, 2.30 Х/ф "Как же быть сердцу". [12+]
6.05 Х/ф "Как же быть сердцу-2". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Устами младенца.
9.20 Когда все дома.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Парад юмора. [16+]
13.50 Х/ф "Завтра будет новый день". [12+]
18.15 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
1.00 Д/ф "За отцом в Антарктиду". [12+]
4.12 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "С Днем матери!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Звонок. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башҡорттар. [0+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Детей много не бывает. [6+]**
**17.30 Концерт ко Дню матери. [12+]**
**18.30 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Красная кнопка". [16+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.15 Т/с "Крик совы". [16+]**
**2.00 Спектакль "Банкрот, или свои люди сочтемся". [12+]**
**4.00 Автограф. [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (8) дүшәмбе | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 24 (9) шишәмбе | 7:36 | 9:06 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 25 (10) шаршамбы | 7:38 | 9:08 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 26 (11) кесе йома | 7:40 | 9:10 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 27 (12) йома | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 28 (13) шәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 29 (14) йәкшәмбе | 7:45 | 9:15 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЗАМАНДЫҢ БАРОМЕТРЫ - ЖУРНАЛИСТ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**45-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Нәжми. Тағараҡ. Шағир. Һағыш. Айсыҡ. Әҙәбиәт. Ҡоралай. Аббат. Етеҙ. Аты. Фил. Карап. Лама. Сеул. Радар. Регби. Ниәт. Кәңәш. Алеут. Быймасы. Йырсы.

**Вертикаль буйынса:** Ҡаразирә. Һарауыс. Лупа. Сик. Тары. Әлибай. Шәйех. Нағыш. Филтә. Шаммас. Ғәбиҙуллин. Ирбис. Инҡар. Ыҙа. Ата. Карта. Бина. Алла. Ҡот. Пират.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 ноябрь "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айтматов), драма. 18.00 16+

**22 ноябрь "Хәтер юғалтҡыс мөхәббәт"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**28 ноябрь "Килә яуа, килә яуа"** (З.Хәким), комедия. 16+

**29 ноябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), әкиәт. 12.00 0+

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры

**21 ноябрь Премьера! "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

**22 ноябрь "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 12+

**24 ноябрь "Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+

**25 ноябрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+

**26 ноябрь "Шәмсетдин һәм Шәмсура"** (Т. Ғиниәтуллин), новелла. 12+

**27 ноябрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия. 12+

**28 ноябрь "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+

**29 ноябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21 ноябрь "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин). 12.00, 14.00 0+

**22 ноябрь "Маша и Медведь"** (Г. Ландау, В. Швембергер). 12.00, 14.00 0+

**28 ноябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+

**29 ноябрь "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). 12.00, 14.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**22 ноябрь "Weekend с органом"** 15.00 6+

**24 ноябрь "Марина Цветаева"** Әҙәби шишәмбе. 6+

**28 ноябрь "Музыку слушаем вместе"** 13.00 0+

КӨНАУАЗ

# ТАЖ-ЗӘХМӘТКӘ ҠАРШЫ...



**Башҡортостанда Covid-19 менән көрәш дауам итә. Республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығының рәсми иғландарынан күренеүенсә, һуңғы ваҡытта был сирҙе көн дә йөҙҙән ашыу кеше йоҡтора. Төбәктә тотороҡлоҡ һаҡлау өсөн бер юлы бер нисә яңылыҡ индерелде: 16 ноябрҙән амбулатор дауаланыусыларға кәрәкле дарыуҙар бушлай таратыла башланы һәм Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге булдырылды.**

Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Covid-19 менән сирләүе раҫланған һәм өйҙә дауаланған кешеләр өсөн республика дауаханаларына бушлай дарыуҙар бүлә. Дарыуҙар исемлеге федераль кимәлдә ҡабул ителгән һәм ҡәтғи теркәлгән. Был йыйылмаға антибиотиктар, вирустарға ҡаршы, температураны төшөрөүсе һәм башҡа кәрәкле дарыуҙар инә. Үткән ялдарҙа 1100 ауырыуға тәғәйенләнгән ҡан ҡуйылығына тәьҫир итеүсе һәм вирусҡа ҡаршы дарыуҙар "Башфармация" складына килтерелгән, бактерияларға ҡаршы 2000 кешелек препараттар алынған. Шулай уҡ температураны төшөрөүсе, "Интерферон" дарыуының тәүге партияһы бар. "Әле Рәсәй Хөкүмәтенең һаҡлыҡ фондынан 19 меңдән ашыу ауырыуға ярҙам күрһәтеүгә 151 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән. Ауырыуҙар һанын иҫәпкә алып, беҙ дарыуҙарҙы ай һайын 5 меңдән артығыраҡ сирлегә таратырға ниәтләйбеҙ", - ти был турала республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин. Дарыуҙарҙы Covid-19 менән сирләүе билдәле һәм сирләй тип иҫәпләнгән ауырыуҙар аласаҡ. Хәле уртаса һәм ауыр сирлеләргә өҫтөнлөк бирелә, шул иҫәптән вируслы пневмония менән ауырығандарға ла. Дарыуҙы дауалаусы табип тәғәйенләй һәм поликлиника, дауаханалар нигеҙендә булдырылған махсус бәйләнеш үҙәге бүлеп бирә. Ә пандемия осоронда медицина учреждениеларының эше ҡатмарланыу сәбәпле, дарыуҙарҙы ауырыуҙар өйөнә ташыуҙа "Берҙәм Рәсәй" ирекмәндәре булышлыҡ итә. Фирҡәнең төбәктәге башҡарма комитеты етәксеһе Рөстәм Әхмәҙинуров әйтеүенсә, әлеге көндә 300 ирекмән эшләргә теләк белдергән, республика буйынса көн һайын 200 тирәһе кешегә дарыу алып барыу планлаштырыла.

Республикала медицина учреждениеларына, тиҙ ярҙам саҡыртыу станцияларына мөрәжәғәт итеүселәр һаны көндән-көн арта бара. Шуға күрә бығаса шылтыратыуҙы ҡабул итеүҙәрен оҙаҡ көттөрөүҙәр, коронавирусҡа бәйле генә түгел, башҡа төрлө мәғлүмәти ярҙам алыу ҙа ауырлашыуы күҙәтелде. Быны иҫәпкә алып, Башҡортостанда Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге булдырылды. Уны Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы депутаты Римма Үтәшева етәкләй. Үҙәк "Торатау" Конгресс-холында урынлашҡан, унда үҙәк медицина ойошмаларына ярҙамға халыҡҡа оператив консультация биреү ойоштоdo. "Шылтыратыуҙар ҡабул иткән операторҙарҙан тыш, структурала медицина эксперттары бар. Улар - оператив рәүештә профессиональ кимәлдә шылтыратыу ҡабул итеп, эшкәртә һәм тейешле ярҙам күрһәтә алған Башҡорт дәүләт медицина университеты хеҙмәткәрҙәре, профессорҙар, доценттар, ассистенттар, федераль медицина ойошмалары, Роспотребнадзор, Росздравнадзор, Башҡортостан Республикаһының Гигиена һәм эпидемиология үҙәге, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы хеҙмәткәрҙәре", - тине Римма Үтәшева.

Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге көн һайын иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем эшләй. Тәнәфес һәм ял көнө юҡ. Республиканың барлыҡ райондары өсөн берҙәм телефон номеры - **8 (347) 218-19-19**.

Башҡа хеҙмәттәрҙең ҡыҙыу элемтә номерҙары ла эшләй:

- **1301** - табипты өйгә саҡыртыу;
- **103** - ашығыс ярҙам саҡыртыу;
- **8 (347) 286-58-27; 8 (347) 279-91-20** (күп каналлы, тәүлек әйләнәһенә) - коронавирус инфекцияһы һорауҙары буйынса;
- **8-800-201-89-03** - изоляцияла ултырған 65 йәштән өлкәндәргә һәм хроник сирлеләргә аҙыҡ-түлек һәм дарыу килтереү.

СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. ӘҘӘБИӘТ.

## БИКБАЙ УҠЫУҘАРЫ...



**10 декабрҙә Р.Т. Бикбаев исемендәге 102-се башҡорт гимназияһында онлайн форматта Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа һәм Башҡорт теле көнөнә арналған "Бикбай уҡыуҙары" төбәк-ара ғилми-ғәмәли конференцияһы була.**

Сараны Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы, Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты, Өфө ҡалаһы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы, Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ һәм Рауил Бикбаев исемендәге 102-се башҡорт гимназияһы ойоштора. Конференцияла республиканың һәм Рәсәйҙең дөйөм белем биреү ойошмалары уҡыусылары, шулай уҡ һөнәри, юғары белем биреү ойошмалары студенттары, уҡытыусылар ҡатнаша ала. Ғаризалар һәм эштәр 9 ноябрҙән 3 декабргә тиклем ҡабул ителә. Конференцияла Рауил Бикбаевтың тормошо, ижады, эшмәкәрлеге тураһында эссе һәм Рауил Бикбаевтың әҫәрҙәре буйынса буктрейлер номинациялары буйынса башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған ижади эштәр ҡатнаша.

## КОЛУМБИЯ ФЕСТИВАЛЕНДӘ...

**"Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле 12-14 ноябрҙә XVIII "A world of dance that saves life, collecting knowledge" халыҡ-ара фестивалендә сығыш яһаны, ул Колумбияның Сантьяго-де-Кали ҡалаһында ойошторолдо. Пандемияға бәйле быйыл сара онлайн үткәрелде.**

"Мираҫ" ансамбле "Йыуаса" һәм "Илкәйем" йыр-хореография композицияларын күрһәтте. Фестивалдә ҡатнашыусыларҙың сығыштары Сантьяго-де-Кали ҡалаһының "Telepacifico" урындағы төбәк йәмәғәт телевидениеһында, шулай уҡ Фейсбукта һәм Инстаграмда Халыҡ мәҙәниәт институтының рәсми төркөмдәрендә трансляцияланды. Тамашасылар Колумбия, Аргентина, Конго, Индонезия, Рәсәйҙең музыкаль коллективтарының концерт номерҙарын ҡарай алды. Фестивалде ойоштороусылар - Колумбия мәҙәниәт институты, Колумбия фольклоры һәм бейеүе мәктәбе. Сара Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советы булышлығында уҙғарылды. Фестивалдең маҡсаты - донъя халыҡтарының бейеүҙәрен популярлаштырыу, төрлө мәҙәниәттәрҙе ижадҡа ылыҡтырыу, традицияларҙы һаҡлау һәм үҫтереү.

## БЕҘҘЕКЕЛӘР...



**Башҡортостандың М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры Чебоксар ҡалаһында уҙғарылған "Волга әкиәте" төбәк-ара фестивалендә ҡатнаша. Йәш тамашасылар милли театрҙары һәм йәштәр театрҙары фестивале 16-22 ноябрҙә Михаил Сеспель исемендәге Сыуаш дәүләт йәш тамашасы театрында үтә.**

Быйыл фестиваль Сыуаш автономиялы төбәге барлыҡҡа килеүгә 100 йыл тулыуға һәм Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арнала. Унда ете театр ҡатнаша, Өфө артистары 20 ноябрҙә Марта Райцес пьесаһы буйынса ҡуйылған "Я - кулак. Я А-Н-Н-А" социаль драмаһын тәҡдим итте. Шулай уҡ сара сиктәрендә артистар, режиссерҙар, студенттар һәм һөнәри уҡыу йорттары уҡыусылары өсөн театр буйынса белем биреү, "Театр Рәсәй халыҡтарының туған телен һәм милли мәҙәниәтен һаҡлау моделе булараҡ" тигән темаға фекер алышыу ойошторолдо.

Әйткәндәй, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектакле "Дуҫлыҡ күпере" Бөтә Рәсәй онлайн-фестивалендә күрһәтеләсәк. Ул Г. Константинов исемендәге Рус академия драма театры сәхнәһендә 29 ноябрҙә уҙа.

## ТАҒЫ БЕР КОНКУРС...



**14 декабрҙә билдәләнгән Башҡорт теле көнө уңайынан "Viberгә" интернет-конкурсы старт алды.**

Уның маҡсаты - социаль селтәрҙәрҙә башҡорт телендәге контентты, башҡорт теленә, башҡорттарҙың тарихына, шәжәрәһенә ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу. Ҡатнашыусыларҙың йәше сикләнмәй. Улар 2020 йылдың 7 декабренә тиклем Вйөләнештә һәм Instagram селтәрҙәренә үҙҙәренең ижади эштәрен һалырға тейеш. Ике номинация тәҡдим ителә - "Башҡорт телендә иң яҡшы открытка" һәм "Башҡорт телендә иң яҡшы вайн". Шарттар менән @bashkort_postcards һәм @bashkort_vine аккаунттарында танышырға мөмкин. Популяр башҡорт вайнерҙары, блогерҙары һәм башҡаларҙан торған жюри баһалары буйынса номинацияларҙа еңеүселәр билдәләнә. Аҡсалата бүләк - 3 меңдән 50 мең һумға тиклем.

## ЯҢЫ ҠАРАШ



**"Башҡорт теленә ЯҢЫ ҠАРАШ" социаль видеороликтар конкурсы башланды. Конкурс социаль селтәрҙәрҙә башҡорт телен үҫтереүгә йүнәлтелгән. Ҡатнашыусыларҙың йәше сикләнмәй.**

Конкурсты Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының милли мәғариф идаралығы һәм Мәҙәниәт министрлығы технологиялар һәм интернет заманында туған (башҡорт) телде өйрәнеү проблемаһына йәмәғәтселектең иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында ойоштора. Еңеүселәргә елле генә бүләктәр ҙә әҙерләнгән: 1-се урын өсөн Apple iPhone 11, 2-се урынға ноутбук, 3-сө урынға планшет. "Тамашасылар һөйөүе" номинацияһында еңеүсене смартфон өсөн стабилизатор көтә, уны алыу өсөн социаль селтәрҙәрҙә тауыш йыйыуҙа ҡатнашырға кәрәк була. Социаль ролик авторҙары видеоматериалдарҙа авторлыҡ титрҙарын күрһәтергә тейеш. Реклама материалдарын файҙаланыу тыйыла. Эштәрҙе 2020 йылдың 10 декабренә тиклем тапшырыу талап ителә. Ҡатнашыу өсөн: fond-bash@bk.ru электрон почтаһына ғариза ебәрергә, хаттың темаһына "Конкурсҡа эш" тип яҙырға һәм исем-шәрифте күрһәтергә кәрәк.

## ҺЫЛЫУҘАР ЕҢЕҮ ЯУЛАЙ...



**Красноярскиҙа "Мисс Азия-Себер - 2020" милләт-ара матурлыҡ һәм һәләт конкурсының финалы уҙҙы. Башҡортостан ҡыҙы Наилә Дәүләтшина "1-се Вице-Мисс Азия-Себер-2020" исемен яуланы.**

Наилә Дәүләтшина сығышы менән Башҡортостандың Ейәнсура районынан. М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт филологияһы факультетында беренсе курста уҡып йөрөй. Конкурста Наилә "Бөрйән ҡыҙҙары" бейеүен башҡарҙы, ҙур бәлеш бешерҙе һәм башҡорт халҡының йолалары хаҡында һөйләне. Модель агентлығында ҡыҙ 2018 йылдың яҙында шөғөлләнә башлай. Ошо ваҡыт эсендә ул байтаҡ конкурстарҙа ҡатнашып, еңеүҙәр яулап өлгөргән. Мәҫәлән, Мысырҙа уҙғарылған "Miss Eco Teen - 2019" конкурсында ҡатнашҡан, "Мисс Башҡортостан - 2019" конкурсында тәүге бишеү иҫәбенә ингән, "Башҡортостан һылыуҡайы-2018" - 2-се вице-мисс исемен, "Мисс ЭКО Башҡортостан - 2019" - гран-при яулаған.

### АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

## ТӨЛКӨ БУЛМА... арыҫлан бул

**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

Хоҙай хәҡиҡәтте күрә, ләкин ул хаҡта тиҙ генә асып һалмай. Бында ла ҡағыҙ ҡоллоғо!

**(Илья Ильф).**

Баланың ҡолҡона йоғонто яһау осон иң ҡулайлы ваҡыт - ул тыуғанға тиклемге йөҙ йыл.

**(Уильям Индж).**

Теләктәре булмаған кеше генә азат була ала. Шулай булғас, ниңә азат булырға ынтылырға?

**(Элиас Канетти).**

Күп һөйләнеүҙәр менән әңгәмәсеңдең фекерен үҙгәртә алмаһаң да үҙеңдекен үҙгәртеүең ихтимал.

**(Альфред Капю).**

Ҙур ҡалала күпте күрергә, ә бәләкәйендә күпте ишетергә мөмкин.

**(Жан Кокто).**

Ҡатын-ҡыҙ иренең көнсөллөгөн кисерә ала, ә бына көнләшмәүен күтәрә алмай.

**(Колетт).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер хандың байлығын урлайҙар. Хеҙмәтселәре ҡала ҡыҙырып, сит ил кешеләрен эҙләргә тотона, сөнки был ҡалала йәшәүселәр хандың байлығын урларға батырсылыҡ итмәйәсәк, тип уйлай барыһы ла. Каруанһарайҙы тикшергән саҡта хан һалдаттары Әлим исемле кешегә юлыға. Ул үҙен доктор тип таныштыра, әммә һалдаттар быға ышанмай, уны хан һарайына алып килә. "Һин врачмы?" - тип һорай унан хан. "Эйе, мин врач, ләкин үҙенсәлекле врач", - ти Әлим.**

**"Улай булғас, үҙеңдең бур түгеллегеңде раҫлар өсөн һин бында кемдәлер дауаларға тейешһең", - ти хан. "Бөтөн врачтар кеүек, минең дә үҙ ҡағиҙәләрем бар", - тип хәләләшә Әлим. - Мин дауалау өсөн ауырыуҙы үҙем һайлайым. Мин анау һуҡыр кешене дауаларға теләйем". "Ул минең кейәүем, уның бына егерме йыл инде ике күҙе лә күрмәй", - ти хан. "Мин уны дауаларға риза", - ти Әлим. Шул саҡ бер вәзире килеп, хандың ҡолағына:**

**"Ғәли йәнәптәре, онотмағыҙ, һеҙҙең ҡыҙығыҙ шул тиклем йәмһеҙ, шуға ла уға һуҡыр кейәү эҙләргә тура килде. Хәҙер ул күрә башлаһа, яҡшы булмаясаҡ бит..." - тип бышылдай. "Ярай, етте, - тип ҡысҡыра шул саҡ хан. - Әлимде беҙ бурлыҡта ғәйепләмәйбеҙ, ҡыуығыҙ уны бынан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәррирләт: Сәриә ГАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905

Тиражы - 3007
Заказ - 943/11